ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 апрель (алағарай) 2023

№ 15 (1057)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атайсал...**
ул көс туплай торған урын




5

**Донъя энциклопедияһына...**
Урал тауҙарынан ҡараш




8-9

**Ошолай ҙа театр була икән!**



11

**Мунсаһыҙ - баҡса...**
ерһеҙ башҡорт булмай!



12


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тиғән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*БАШ ҠАЛАМ*

# ТОРМОШ ГӨРЛӘЙ...

**Республиканың баш ҡалаһы Өфөлә йәшәүемә сикһеҙ шатмын. Уның йүкәле урамдары, йәшел парктары, иҫтәлекле урындары, күркәм майҙандары, архитектура ҡомартҡылары - барыһы ла күңелемә яҡын һәм ҡәҙерле. Ә ваҡытында, Өфөгә тәүге тапҡыр килгәндә, баш ҡала бөтөнләй оҡшаманы. Урал аръяғы райондарының береһенән, таңғы сәғәттәрҙә поезда килеп төшөп, Өфө тауына трамвайҙа күтәрелгән саҡта тирә-яҡтағы, юл буйлап үҫкән урман араһындағы сүп-сарҙың күплегенә иҫем китеп, "Нисек үткәрермен бында биш йыл уҡыу ваҡытын?" тип ҡайғырғаным әле булһа хәтерҙә. Ләкин ҡулға диплом алғансы баш ҡаланы шул тиклем яратып өлгөрҙөм, ауылыма ҡайтам, тигән уйҙар һыпырылып юҡҡа сыҡты.**

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ӨФӨ ЙҮКӘЛӘРЕ...



**Өфөлә Рәсәйҙәге иң оҙон йүкә аллеяһы барлыҡҡа килә, тип хәбәр иттеләр баш ҡала мэрияһынан.**

Муниципалитетта белдереүҙәренсә, Өфөлә йыл һайын ойошторолған "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһына әүҙем әҙерлек бара. "Ошо күләмле акция барышында, 26 апрелдә, Октябрь проспекты буйлап "Ҡалала йәшәүселәр" аллеяһы ултыртыла. 4-4,5 метр бейеклегендәге йүкә үҫентеләре әҙер", - тип билдәләнеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтендә.

Хәбәр ителгәнсә, 22 апрелдән 13 майға тиклем Башҡортостанда бишенсе тапҡыр "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһы ойошторола, акцияны үткәреүҙең берҙәм көндәре тип 29 апрель һәм 13 май билдәләнгән. Унда 90 меңдән ашыу кеше һәм 1700 берәмек техника ҡатнашыр тип көтөлә. Яҙғы акция барышында 24 мең бейек ағас һәм 57 меңдән ашыу башҡа үҫентеләр ултыртыласаҡ.

*ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ*

# МАҠСАТЛЫЛАР МӨХИТЕНДӘ...

## белем ала был балалар




**Тиҙҙән бөтә ил буйлап моңло ҡыңғырау сыңлап, сығарылыш уҡыусылары оло тормош юлына баҫтырыу мәле лә етәсәк. Тулҡынландырғыс та, бер аҙ моңһоу ҙа осор булыуға ҡарамаҫтан, ул белем усаҡтары коллективы өсөн тынғыһыҙ мәл: имтихандар, тантанаға әҙерләнеү, киләһе уҡыу йылына яңы уҡыусылар ҡабул итеү. Бөгөн гәзит уҡыусыларҙы алдынғы уҡыу йорттарының береһе булған Республика инженер лицей-интернаты менән таныштырыу маҡсатында инновацион эшмәкәрлек буйынса директор урынбаҫары Айнур ӘМИРХАНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**➔ 2023 йыл Рәсәйҙә Педагог һәм остаз йылы тип иғлан ителде. Ул уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреүҙе, башҡарған эшенең әһәмиәтен аңлатыу һәм баһалауҙы маҡсат итеп ҡуя. Һеҙҙең белем усағында ниндәй уҡытыусылар эшләй?**

- Рәсәй Президенты Владимир Путиндың уҡытыусының бөйөк ролен, мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, йылды тап ошолай атауы бөгөнгө тормошта бик урынлы, тип уйлайым, сөнки мәктәп, уҡытыусы һәр балаға ҙур тормош юлына аяҡ баҫырға, күңеле ятҡан һөнәргә, вазифаға, дәрәжәгә эйә булырға юллама биреүсе, илһөйәрлек тәрбиәләүсе булып тора. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров та уҡытыусыларҙың хеҙмәтен юғары баһалай. "Педагогтар беҙҙең балаларыбыҙҙы ысын кеше, тыуған илебеҙҙең патриоттары итеп тәрбиәләй, тәрән фекер аша ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәтә. Уҡытыусыларҙың хеҙмәте еңел түгел, әммә бик изге, мөһим хеҙмәт ул", - ти ул.

Лицейыбыҙ алдынғы ҡарашлы, көслө, тәжрибәле, әүҙем, бик талантлы педагогтар коллективы менән ғорурлана ала. Улар илһамланып эшләй, эҙләнә, тәжрибәләре менән бүлешә, "Сириус" белем биреү үҙәгендә белемдәрен арттыра, дәреслектәр, мәҡәләләр яҙа, яңы университет тупһаһын аша үткән йәш коллегаларын үҫтереүгә күп көс һала, уҡыусыларға заман талаптарына ярашлы белем һәм тәрбиә бирә һәм шул уҡ ваҡытта балалар менән Халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй кимәлендә үткән олимпиадаларҙа, ғилми-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашып, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

✓ *Рус мәктәбендә эшләйем. Үҙебеҙҙең мәктәп эсендә анализ эшләп ҡарағаныбыҙ бар: кем башҡорт телен туған тел булараҡ уҡый, 9-сы класты тамамлағанда рус теленән Мотлаҡ дәүләт имтиханын (ОГЭ) яҡшыраҡ яҙа.*



*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урыныҡ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕЛЕБЕҘҘЕ...
## үҙебеҙҙән һаҡлай алырбыҙмы?

*Яҙгөл СИРБАЕВА, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" республика бәйгеһе лауреаты:* Яңыраҡ бер танышым: "Балама мәктәп һайлай алмайбыҙ, башҡорт гимназияһына бирәйек тиһәм, унда башҡорт теле дәресе күп икән", - ти. Үҙен илһөйәр, башҡортом тип кенә торған кеше итеп беләм. Үҙ балаларына ҡағылһа, милләттәштәребеҙ ни өсөндөр башҡорт теле уға белем алырға, БДИ тапшырырға ҡамасаулар, тигән фекер яғына ауыша ла ҡуя.

Мин 17 йыл Өфө уҡыусыларына башҡорт телен өйрәтәм. Рус мәктәбендә эшләйем. Үҙебеҙҙең мәктәп эсендә анализ эшләп ҡарағаныбыҙ бар: кем башҡорт телен туған тел булараҡ уҡый, 9-сы класты тамамлағанда рус теленән Мотлаҡ дәүләт имтиханын (ОГЭ) яҡшыраҡ яҙа. Бер йылы 12 бала мәктәпте миҙалға тамамланы, уларҙың 7-һе - туған башҡорт телен өйрәнгән балалар ине. Ә миҙал алыр өсөн, беләһегеҙ, бар фәндәрҙән дә яҡшы өлгәшергә кәрәк. Рус теленән БДИ тапшырғанда уның инша өлөшөндә әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар килтереү мотлаҡ. Ошо миҫалдар тик рус әҙәбиәте өлгөләренән булырға тейеш, тигән талап юҡ. Бер уҡыусым һүҙыш темаһын яҡтыртҡанда Мостай Кәримдең "Ярлыҡау"ын алып, имтиханын һөҙөмтәле тапшырып ҡыуанды. Тимәк, башҡорт телен уҡыһа, рус теленән артта ҡала, БДИ тапшыра алмай, тип уйлағандар ныҡ хаталана. Туған телендә һөйләшкән баланың фекерләү ҡеүәһе ныҙыраҡ үҫешә. Бөгөн был турала күп һөйләнелә. Тормошта уңышлы кеше булыу өсөн өлгөлө аттестаттан бигерәк, ана шул фекерләй, уйлай, һығымта яһай белеү күберәк кәрәк.

Программа шулай төҙөлгән: башҡорт теле рус теленән темалар буйынса алдараҡ бара. Балалар ике телде сағыштыра, быныһы ла уларға файҙа ғына. Башҡорт телендә, мәҫәлән, сифат дәрәжәләре менән танышҡан уҡыусы рус телендә ошо теманы өйрәнеү башланғас, беҙ быны үттек тә инде, тип мотлаҡ әйтеп ҡуя. Алған белем бер ҡайҙа ла китмәй, барыһы ла баланың үҫешенә үҙ өлөшөн индерә. Башҡорт теленең программалары төрлө итеп төҙөлгән, унда тел ғилеме генә түгел, ә сәнғәт тә, мәҙәниәт тә, тарих та - былар уға һәр тема буйынса үҙ ҡарашын формалаштырырға ярҙам итә. Балаға уны өйрәнеүе ҡыҙыҡлы. Башҡорт теле буйынса ҡыҙыҡлы бәйгеләр, олимпиадалар ҙа күп. "Иң аҡыллы, иң һәләтле, иң матур балалар һеҙҙә", - тип, башҡа телдәр уҡытыусылары беҙгә көнләшеп ҡарай.

Балағыҙҙың туған телен өйрәнеүенең ыңғай яҡтарын тағы ла күп һанай алам. Тик минең ошо рәүешле һеҙҙең фекерегеҙҙе үҙгәртергә тырышыуымдың бер файҙаһы ла юҡ. Быны һеҙ үҙегеҙ аңларға тейешһегеҙ, милләттәштәр. 2022/2023 уҡыу йылында, яңы ҡанунға ярашлы, башҡорт теле уҡыу планының мотлаҡ уҡытыла торған өлөшөнә күсерелде. Эйе, уны дәүләт теле итепме, йә туған тел итепме уҡытыу өсөн бөгөн дә ата-әсәнең ризалығы кәрәк, шулай ҙа уҡыу планының мотлаҡ өлөшөндә булыуы һөҙөмтәһендә башҡорт теле һәр мәктәптә, һәр класта 1-әр сәғәт булһа ла уҡытыла. Мин эшләгән 114-се мәктәптә 3 сәғәт: башҡорт дәүләт теле, туған тел, туған әҙәбиәт булараҡ өйрәнелә. Программалар телебеҙҙе яҡлай, ә беҙ уны үҙебеҙҙән үҙебеҙ яҡлай алырбыҙмы?

*АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР*

# ШИҒЫР БУЛЫП ТУПРАҒЫМА ТАМАМ,
## бурыс ҡайтарам...

**2023 йылдың Башҡортостанда "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы итеп иғлан ителеүе күп кенә башланғыстарға юл асты. Иң беренсе нәүбәттә үҙ атайсалында, йәғни тыуған ауылдарында йәшәүселәр был башланғысты тыуған яғын тәртипкә килтереү, сүп-сарҙы таҙартыу, ағас ултыртыу, зыяраттарҙы кәртәләп алыу тип аңлап, ошо йүнәлештәге эштәрҙе йөнләндерһә, тыуған яҡтарынан алыҫта, ҡалаларҙа йәшәүселәр ҡасандыр бик әүҙем эшләгән яҡташтар ойошмаларын ҡайтанан тергеҙеп, тыуып-үҫкән төбәктәренә ярҙам итә башланы.**

АТАЙСАЛ

### Өймәкләшеү Өфөлә башланды

"Атайсал" проекты сиктәрендә районларҙа һәм баш ҡалабыҙ Өфөлә "Яҡташлыҡ көсө" форумдары үтеүе лә маҡсатҡа ярашлы башланғыс. Уның нигеҙендә берләшеү һәм тыуған төбәккә ярҙам итеү идеяһы ята. Әммә ағымдағы йылдың "Атайсалға - изге ғәмәлдәр йылы" тип аталыуы был эштәрҙең тик быйыл ғына башланғанын аңлатмай. Хәтерегеҙҙә булһа, үткән быуаттың етмешенсе йылдарында баш ҡалабыҙ Өфөлә уҡыусы студенттар яҡташлыҡ принцибы буйынса төркөмләшә башланы. Уларҙың тәүге ячейкалары батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле янында осрашып, тәүге осорҙа йырлап-бейеп күңел асты. Бөгөнгөләй иҫемдә, 1980 йылда беренсе курсҡа уҡырға барғанда Салауат һәйкәленең уң яғында баймаҡтар, һул яғында - әбйәлилдәр, бир яғында хәйбуллалар, йылайырҙар ҡурайға, гармунға бейене. Егеттәр тәртип тә һаҡланы үҙ биләмәһендә, иҫерек ҡала егеттәре бейеү түңәрәктәренә инеп, ҡаңғыра башлаһа, тиҙ генә сығып китергә мәжбүр иттеләр. Йәштәрҙең телендә бер йыр булды:

*Салауат батыр ҡорос атында*
*Һине лә, мине һаҡлай түгеме?*

Тап шул йылдарҙа яҡташ йәштәр "Зоркий" фотосалонында күмәкләп фотоға төшөүҙе йолаға әйләндереп алды. Йәштәр йәмле яҙҙарҙа, йәй баштарында ҡаланан ситкә сығып һабантуйҙар үткәрҙе. Был сараға йәштәрҙең тыуған районы етәкселәре ҡунаҡҡа саҡырылды. Хеҙмәттәшлек тап шулай башланды. Күп тә үтмәҫтән, район етәкселәре яҡташ студенттарына аҙыҡ-түлек тейәлгән ылауҙар оҙата башланы. Бер йылды мине Әбйәлил районы йәштәре үҙҙәренең һабантуйына саҡырҙы. Райондың Мәхмүт ауылынан Ирошат ағай Нарынбаев көрәштә еңеп, һарыҡ алды. Бүләген электричкала Өфөгә алып ҡайттыҡ. Тик БДУның данлыҡлы 1-се ятағы вахтеры беҙҙе һарыҡ менән ятаҡҡа үткәрмәне. Шунда ятаҡтан ситкәрәк, Ағиҙел ярының кеше йөрөмәгән аулаҡ урынына барып, малды салып, һуйырға тура килде. Эсәк йыуырға тип ятаҡтан ҡыҙҙар бизрәләр, тастар тотоп сыҡҡаны бөгөнгөләй хәтеремдә. Кис ятаҡта әбйәлилсә бишбармаҡ менән һыйландыҡ.

*БАШ ҠАЛАМ*

# ТОРМОШ ГӨРЛӘЙ...

**(Башы 1-се биттә).**



Быйыл Өфөгә тәүге тапҡыр аяҡ баҫыуыма 26 йыл. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, ләкин ҡаланың үҙгәрешен күреп-белерлек дәүер йәшәлгән. Шулай студент йылдарында "Өфө" универмагы тирәһен ярата инем, унда һәр ваҡыт халыҡ ҡайнаны, магазинда матур әйберҙәр һатылды, ер аҫты үткәүеләндә лә үҙенә генә хас тормош ҡайнаны. Бөгөн дә был урындар әллә ни үҙгәрмәгән, бары тик реклама плакаттары ғына йыш алмашына. Әле булһа ошо тирәне яратам, айына бер барып урайым, сәскә, еләк-емеш һәм башҡа төрлө әйберҙәр һатҡан әбей-бабайҙар менән дә танышып бөттөм инде. Уларҙың "бизнесына" ҡамасау итмәүҙәре бик хуп, сөнки улар ҡаланы йәнләндереп тора кеүек.

Йыш ҡына эш буйынса Телеүҙәк районында булам. Ниһәһе аптырата: йыл да тигәндәй, Пуш-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓21 апрелдә Башҡортостан мосолмандары изге Рамаҙан айын тамамлап, Ураҙа ғәйетен билдәләне. Өфө мэрияһынан хәбәр итеүҙәренсә, республиканың баш ҡалаһында был көндө 24 мәсеттә йәмәғәт менән байрам намаҙҙары уҡылды. "Диндарҙар күп йыйылған урындарҙа полиция, именлекте тәьмин итеү үҙәге хеҙмәткәрҙәренең һәм медиктарҙың дежурлығы ойошторолдо", - тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенән.

✓Рәсәйҙең һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министры Мәҡсүт Шадаев һүҙҙәренсә, илдә көҙгө саҡырылыш осоронда хәрби иҫәп реестрының эшләй башлауы мөмкин. Билдәләнеүенсә, башланғыстың төп маҡсаты - хәрби иҫәптә торған граждандар тураһында мәғлүмәттәрҙе системаға һалыу һәм актуалләштереү. Хәҙер хәрби комиссариаттарға ғаилә хәленең, пропискаһың, эш, белем биреү урынының үҙгәреүе тураһында мәғлүмәт биреү талап ителмәй. Бынан алдараҡ Дәүләт Думаһының аҙаҡҡы уҡыуҙа электрон повесткалар тураһында закон проектын раҫлауы хаҡында хәбәр ителгәйне.

✓Белоруссия зубрҙарының популяцияһын булдырыу өсөн Башҡортостанға 2023 йылда 18 баш мал килтерелә. Был турала Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов белдерҙе. Бынан алдараҡ "Башинформ" Башҡортостанда зубрҙарҙы Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы менән сиктәш Ыҡ дәүләт зоологик заказнигы биләмәһендә урынлаштырырға йыйыныуҙарын хәбәр иткәйне.

✓Башҡортостан Башлығы "Башҡортостан" махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү үҙәге" ойошмаһын булдырыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Үҙәкте ойоштороусы - республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы.

✓Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин "Ватан яугирҙары ғаиләләре комитеты" төбәк бүлеге активы менән осрашыу үткәрҙе. Уның һүҙҙәренсә, комитет махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам фонды менән бер бинала урынлаша. Шулай итеп, мөрәжәғәт итеүселәргә һәр яҡтан ярҙам алыуы еңеләшә.

✓ *Данир Ғәйнуллин "Киске телеүҙәк" программаһында атайсалың өсөн изге ғәмәлдәр башҡарыуҙы "бурыс ҡайтарыу" тип атаны. Тыуған еребеҙгә ҡайтарыр бурыстарыбыҙ булған өсөн дә йәшәйбеҙҙәр донъяла.*



## Яҡташлыҡ көсө

Яҡташлыҡтың ниндәй көскә эйә булғанлығын тыуған йорттан айырылғас ҡына аңлайһың инде. 1-се курста уҡығанда өлкән курс егеттәре менән бәргеләшеп алырға тура килде. Улар дүртәү булғас, миңә күберәк тә эләккәндер инде, дәрескә бара алманым. Иртәгәһенә хәлемде ишетеп, тарих факультетында уҡыған яҡташ ағайҙар Рәил Ғәликәев менән Шәрифйән Абҙаҡов килеп инде. Улар һүҙҙе ҡыҫҡа тотоп, шундуҡ теге егеттәрҙе урындарына ултыртты. Күҙ менән ҡаш араһында теге егеттәр яҡын дуҫтарыма әүерелде, нимә алып, нимә бирергә белмәй йүгереп йөрөнөләр.

Был хаҡта яҙғаным да булды, ул ваҡытта Өфө урман техникумы егеттәре бигерәк уҫал ине. Төрлө сәбәп-һылтауҙар табып (күп осраҡта ҡыҙҙарға килеп, беҙҙең егеттәр менән әләгешеп), йөҙәрләбе бергә тупланып, беҙҙең пединститут егеттәре менән һуғышырға килә инеләр.

Нисек кенә сәйер тойолмаһын, был тәбиғи хәл-күренеш. Бер тапҡыр киске эңерҙә йөҙ егеткә йөҙ егет ҡаршы торабыҙ. Килешеү буйынса ике яҡтан да берәр егет сығып һөйләшергә, кәрәк икән, һуғышырға тейештәр. Беҙҙең яҡтан Рәил ағай Ғәликәев сыҡты. Ул урталыҡта туҡталып ҡалып, дәғүәсеһен көтөп тора. Ҡаршыһына бер бәһлеүен сығып баҫты. Улар һөйләште лә һәр ҡайһыһы үҙҙәренекеләргә боролоп, "Һуғышмайбыҙ" тип ҡысҡырҙы. Урман техникумы яғынан сыҡҡан егет тә Баймаҡтан булып сыҡты. Һөҙөмтәлә ҡабырғаларҙы һанашмай ғына йылмайышып таралыштыҡ. Быларҙы ни өсөн яҙаммы? Яҡташлыҡтың көсөн күрһәтте низағлашыуҙың солох менән тамамланыуы. Һуңынан Рәил ағайҙан һораштым: "Әбйәлилдәрҙе көлдөрөп, ике Баймаҡ һуғышып тормайбыҙ инде", - тиешкәндәр икән. Баймаҡ кешеһенең үҙ Баймағына ҡул күтәрмәүе шулай уҡ яҡташлыҡ көсө күренеше.

Яҡташлыҡтың ҡөҙрәтен бигерәк тә әрмелә хеҙмәт итеүселәр яҡшы белә. Унда Башҡортостандан хеҙмәт итеүсе барлыҡ һалдаттар ҙа башҡорт булып һаналды. Йәғни һалдаттың милләтен уның тыуған ере билдәләне.

Башҡортостанда район принцибы буйынса яҡташлыҡ ойошмаларының барлыҡҡа килеүенә ырыу феномены йоғонтоһо ғәйәт ҙур. Был яҡташлыҡ көсөнөң бөтмәҫ-төкәнмәҫ потенциалы. Хәйер, ҡан тартылыуына ни етә! Беҙ был көстө баһалап та бөтә алмайбыҙҙыр әлегә. Нимә генә тимә, халҡыбыҙ туғанлыҡ менән көслө, ырыу, ара, зат берҙәмлеге менән ҡөҙрәтле. Баймаҡтар, тиһәк, асылда, бөрйәндәр, бөрйәндәр, тиһәк - бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтар, хәйбуллалар менән ейәнсуралар тиһәк - үҫәргәндәр, күгәрсендәр, көйөргәҙеләр, тиһәк - ҡыпсаҡтар менән бөрйәндәр, белореттар, тиһәк - тамъяндар менән ҡатайҙар, мәләүездәр, тиһәк - тамъяндар, салауаттар, тиһәк - шайтан-көҙөйҙәр, әйлеләр, йылайырҙар, тиһәк -түңгәүерҙәр, әбйәлилдәр, тиһәк - тамъяндар, күбәләктәр, түңгәүерҙәр, ишембайҙар, тиһәк - юрматылар, учалылар, ғафуриҙар, архангелдәр, тәтешлеләр, тиһәк - гәрәйҙәр, ирәктеләр, таныптар, яңауылдар, тиһәк - урандар, илештәр, тиһәк - йыландар, ҡырғыҙҙар, ҡыйғылар, тиһәк - дыуандар, әйлеләр, аҫҡындар, ҡариҙелдәр, тиһәк - балыҡсылар, туймазылар, тиһәк - әйлеләр, йыландар, ҡаңлылар, ҡобауҙар, тамъяндар, ҡырмыҫҡалылар, тиһәк - табын ырыу-ҡәбиләләре һ.б. бер ҡорға туплана.

## Бурыс ҡайтарыу

Атамаһынан уҡ күренеүенсә, һәр кем өсөн атайсалы ата-әсәһе йәшәгән тыуған яғы һәм уға ҡарата изгелек ҡылыу атай-әсәйеңә изгелек күрһәтеүгә тиң бурысың һаналырға тейешлеге аксиома. Тыуған яҡтың - атай, туған телдең әсәй һүҙҙәре менән нарыҡланыуы ла юҡҡа ғына түгел, тимәк. Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин "Киске телеүҙәк" программаһында атайсалың өсөн изге ғәмәлдәр башҡарыуҙы "бурыс ҡайтарыу" тип атаны. Бик ваҡытлы, бик дөрөҫ һүҙҙәр. Тыуған еребеҙгә ҡайтарыр бурыстарыбыҙ булған өсөн дә йәшәйбеҙҙәр донъяла. Нимә генә тимә, "Бурыслы үлмәй" ти халыҡ мәҡәле.

Һүҙемде күренекле шағирыбыҙ, ғүмере буйына тыуған еренә бурысын ҡайтарып йәшәгән мәшһүр яҙыусыбыҙ, арҙаҡлы шәхесебеҙ Булат Рафиҡовтың шиғыр юлдары менән тамамлайым:

*Башты терәп, япраҡ ысығына*
*Хисте айнытам.*
*Әле генә етди ир инем -*
*Бала саҡҡа әллә кире ҡайттым,*
*Бер тылсымы мәллә*
*тыуған яҡтың -*
*Ҡапыл иренем.*

*Туң күңелгә ошо ер харам,*
*Беҙҙе ҡаршы алған йыр ҙа харам...*
*Шиғыр булып тупрағыма тамам -*
*Бурыс ҡайтарам.*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

кин, Ленин урамдарында матур ғына булып ятҡан тротуарҙарҙы емереп ташлап, яңынан таш һалалар. Ни өсөн бер үк урындарҙы даими эшләүҙәре аңлашылып етмәй, сөнки Черниковка, Һупайлы, Шаҡша һәм башҡа ошондай алыҫтараҡ ятҡан биҫтәләрҙә тротуарҙар бик күптән яңыртылмаған.

Октябрь революцияһы урамы тарихи үҙәктең иң һаҡланып ҡалған урыны. Боронғо өйҙәр әллә күпме тарих һаҡлай үҙҙәрендә. Урам буйлап үҫкән йөҙйәшәр ағастар күпме быуындың үҫеп таралышҡанына шаһит булған. Ҡыҙғаныҫка күрә, уларҙың күбеһе ҡырҡылып ташланған. Бәлки, был урамды төҙөкләндереү эшендә ҡамасау булмаһын өсөн эшләнәләр һәм улар урынына йәш ағастар ултыртылыр, тигән өмөт йәшәй.

Ҡала урамдарында күп осраҡта эсе-тышы бысраҡ, бер-береһен уҙырға тырышып моторын үкерткән автобустарҙың юҡҡа сығып, улар урынына ҙур, заманса автобустарҙың йөрөй башлауы бик яҡшы күренеш булды. Ләкин, миҫал өсөн алғанда, сәғәт киске 10-да "Башҡортостан" ҡунаҡханаһынан бер яҡҡа ла китеп булмауы күңелде бошора. Бары тик Дим биҫтәһенә генә автобустар гөрләп уҙып тора. Бәлки, дәүләт автобустарының эш графигын бер аҙға оҙайтыу яйы барҙыр?

Һуңғы йылдарҙа ҡаланан ситкә сығыуҙа әһәмиәтле роль уйнаған күперҙәргә ҙур иғтибар бирелеүе бик яҡшы. Аэропорт яғына яңы күпер эшләп ҡуйҙылар, элеккеһен төҙәтеүҙе лә оҙаҡҡа һуҙмаҫтар, тип ышанам. Шулай уҡ Затон биҫтәһенә илтеүсе күпер ҙә күптән төҙәтеү көтә ине, ниһайәт, был эште лә башларға торалар икән.

Тағы ла республика һәм ҡала етәкселегенең юлдарҙағы махсус билдәләргә иғтибары күңелгә ятышлы. Әле яңыраҡ ҡына Өфөлә 150 мең квадрат метрҙан ашыу махсус юл билдәләре һалынасағын ишеттем. Был юл хәүефһеҙлеге өсөн бик мөһим. Шулай итеп, Өфө йыллап түгел, айлап үҫә. Халыҡ та күбәйә, йорттар ишәйә. Миллионлы ҡала үҙ тормошо менән йәшәй. Нисек булһа ла, үҙгәрештәр тик яҡшыға ғына булһын.

**Айнур ИШКИЛДИН.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МИНЕҢ КҮҘӘТЕҮҘӘРЕМ



**Журналист һәм яҙыусы Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Күҙәтеүҙәр"ен уҡып барырға яратам. Шуларҙың береһендә тәүгә генә уҡырға төшкән балаларҙың "Алфавит"ты һайлауы, тик бер генә уҡыусының "Әлифба"ны үҙ итеүе хаҡында һүҙ бара. Күптәрҙең уға йылмайып ҡарауына был баланың: "Зато "Әлифба"ла 42 хәреф!"- тип тапҡыр яуап биреүен бик оҡшаттым.**

Авторҙың тағы ла балалыҡ дуҫы, ауылдашы, талантлы шағир мәрхүм Рәйес Түләк хаҡында матур, йылы итеп яҙыуын да күңелемә яҡын алдым. Иҫән сағынан күреп-белмәһәм дә, Әхмәрҙең дуҫы хаҡында яҙғандарынан сығып, Рәйесте нескә, яраланып ҡына барыусы күңелле ир-егет тип ҡабул иттем. Эйе, тап шулайҙыр, шулай булмаһа, заманыбыҙҙың бөтөн яраларын йөрәге аша үткәреп, "Яныу", "Ҡашмау" исемле тетрәтерлек поэмалар яҙыр инеме ул! Ошо ике әҫәре менән генә лә халҡы күңелендә урын алды бит ул.

...Бөгөн әле генә бар Ер шары халҡын тетрәткән "пандемия" тигәнде халыҡ онотто, буғай, тип уйлайым. Эйе, онотолһон ул, ҡабат әйләнеп ҡайтмаһын. Өс йылға һуҙылған ошо коронавирус афәте осоронда бер кем менән аралаша алмайынса, өйҙә генә ултырҙыҡ бит. Шулай ҙа бер файҙаһы тейҙе минең өсөн был осорҙоң: ҡалын ғына блокнот алып, көндәлектәр яҙа башлағайным. Әхмәр туғандың шул "Күҙәтеүҙәре"нә тартым инде. Һәр көн берәй иҫтәлек йә ҡыҙыҡлы хәл иҫкә төшә лә, шуны яҙа һалып та ҡуям, тора-бара ныҡлап мауығып киттем был шөғөл менән. Күпмелер ваҡыттан һуң шул яҙғандарынды уҡып ҡараһаң, бик ҡыҙыҡ тойола хатта.

...Әлеге мәлдә илдә барған махсус хәрби операция менән бәйле ваҡиғалар буйынса күңелем тыныс түгел бер ҙә. Ҡурҡып уянып китәм. Нимә менән бер аҙ күңелде арбарға, онотолорға һуң, тип уйлайым. Уҡырҙай китаптар уҡылып бөткән. Телевизорҙан да йүнле тапшырыуҙар юҡ. Балалар эштә, ейәндәрем мәктәптә. Әлдә генә ваҡытында "Башҡорт халыҡ эпостары" китабын һатып алғанмын. Ошондай эс бошҡан мәлдәрҙә шуны уҡырға яратам. Бигерәк тә "Ҡара юрға" оҡшай миңә. Ә "Аҡбуҙат" эпосында Урал батырҙың улдары менән бергәләп Шүлгән ғәскәренә ҡаршы көрәшеүен, уның күлгә йәшеренеп, ҡотолорға маташҡан дошман ғәскәрен күл һыуы менән бергә һемереп эсеүен күҙ алдыма килтерәм. Ҡайһы милләт ижадында тағы ошондай күренеш бар икән? Үҙ-үҙен ҡорбан итеп булһа ла дошманды еңеүгә өлгәшеү - ул бит халҡымдың батыр улдарының илһөйәрлек, ирек һәм тыуған ил өсөн йәнен фиҙа ҡылыу өлгөләре. Бына ҡайҙан сығанаҡ ала Салауат Юлаев, Шакирйән Мөхәмәтйәнов, Миңлеғәле Шайморатов һәм башҡа шундай фиҙаҡәр ир-егеттәребеҙ ҡаһарманлыҡтары! Халҡымдың ниндәй бөйөк рухи хазиналары бар! Үҙемдең башҡорт булып тыуыуыма Аллаһыма мең рәхмәтлемен, тип ҡат-ҡат ҡабатлайым...

**Фәүзиә УСМАНОВА-ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Ридаль Сәйетов менән таныштырҙы. Бынан алда Ридаль Сәйетов Башҡортостан Башлығының инвестиция эшмәкәрлеге һәм инфраструктура проекттары буйынса кәңәшсеһе булып эшләне. Был вазифала ул Өфөнөң "Ағиҙел аръяғы" перспективалы биләмәһендә инженер инфраструктураһы төҙөлөшө өсөн дә яуап бирҙе.

✓Башҡорт опера һәм балет театрында яңы генераль директор менән таныштырҙылар. Был вазифаға музыкаль етәксе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты Александр Алексеев тәғәйенләнде. Ете йыл Башҡорт опера театрына етәкселек иткән Илмар Әлмөхәмәтов Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтына эшкә күсте, 12 апрелдән ул юғары уҡыу йортоноң ректоры вазифаһын башҡара.

✓Республикаға идара итеү үҙәге етәксеһе Елена Прочаковская республиканың сүп-сарға бәйле күп мөрәжәғәттәр килгән ҡалаларын һәм районларын әйтеп үтте. Уның мәғлүмәттәре буйынса, уҙған аҙнала "Инцидент менеджмент" һәм "Кире бәйләнеш платформаһы" мәғлүмәт системалары социаль селтәрҙәрҙә Өфөнән - 53, Мәләүез районынан - 49, Иглиндән - 27, Благоварҙан - 19, Нефтекаманан 17 ялыу теркәгән. Был исемлектә Өфө, Ишембай, Белорет һәм Дүртөйлө райондары ла бар.

✓Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы 2023 йылдың икенсе кварталына бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡын 100 144 һум күләмендә раҫланы. Бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡы республикала даими йәшәгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға субсидияларҙы иҫәпләү өсөн кәрәк. Аҡса уларға торлаҡ төҙөүҙә (һатып алыуҙа) ҡатнашыу өсөн федераль һәм республика ҡаҙнаһы иҫәбенә бүленә.

✓Белорет районының Егәҙе ауылынан мобилизацияланған яҡташыбыҙ тыуған мәктәбенә бүләк яһаған. Ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡанында ул ноутбук һатып алып, белем усағына тапшырған. Шул рәүешле яугир ярҙам күрһәткән ауылдаштарына рәхмәт белдергән. Өлөшләтә мобилизация сиктәрендә Егәҙенән алты кеше саҡырылған, тағы бишәүһе контракт буйынса хеҙмәт итә. Ауыл халҡы ҡулынан килгәнсә егеттәргә ярҙам итергә тырыша.

ҠЫҪҠАСА

# ТАҒЫ БЕР ОТРЯД...

**"Ватан" ирекле отрядының 17 яугиры ант ҡабул итте. Был тантаналы ваҡиға сәйәси дәрестәр башланыр алдынан булды, тип хәбәр ителә "Башҡорт батальоны" телеграм-каналында.** "Башҡа яугирҙар һәр антты алҡыштар менән ҡабул итте. Кемдер тәнә буйы әҙерләнгән, ятлаған. Кемдер туғандарына фотоһын ебәрҙе. Ә кемдер ант иткәндә тулҡынланды. Ант - ул яугирҙың һәм гражданиндың анты", - тиелә хәбәрҙә. "Башинформ" алдан хәбәр иткәнсә, Башҡортостанда "Ватан" башҡорт ирекле отряды төҙөлдө. Әҙерлек үткәндән һуң яугирҙар махсус хәрби операция зонаһына юллана. Бынан алдараҡ хәрби операцияла ҡатнашҡан "Өршәк" ҡушаматлы Илгиз Солтанморатов ирекмәндәр йыйыу башланғысы менән сығыш яһағайны.

✓ **100 меңдән 400 мең һумға тиклем - Башҡортостанда ауырлыҡ габариты контролен боҙған өсөн йөк машиналары хужаларына ошондай штраф һалына.** Хәбәр ителеүенсә, аҙғыһын юлдарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн апрель аҙағына тиклем төбәк юлдарында 10 тоннанан ашыуараҡ йөк тейәгән автомобилдәргә йөрөү тыйыла. Муниципаль-ара юлдар өсөн сикләү тағы ла ҡатыраҡ - 6 тоннанан артмаҫҡа тейеш. Республиканың автомобиль юлдарында 13 автоматик ауырлыҡ контроле пункты ҡуйылған. Йөкләмә параметрҙарының үтәлешен мониторинг үҙәге операторҙары күҙәтә. Билдәләнеүенсә, сикләү 1 майҙа ғәмәлдән сығарыла, ләкин 1 июндән юл йөрөүҙең йәйге регламенты көсөнә инә - һауа температураһы 32 градустан юғары булғанда, йөк машиналары водителдәренә трассаға сығырға ярамай.

✓ **2024 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме 19 мең һумдан ашыу була. "Российская газета" хәбәр итеүенсә, Дәүләт Думаһында ошо турала закон проекты әҙерләнгән.** Әле МРОТ - 16 мең 242 һум. Депутаттар уны өс меңгә - 19 242 һумға тиклем арттырырға тәҡдим итә. Был сумма Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт министрлығы менән килешелгән. Минималь эш хаҡы күләме даими үҙгәреп тора. Әйтәйек, 2022 йылда ул ике тапҡыр - 1 ғинуарҙан һәм 1 июндән арттырылды. 2022 йылдың башында хеҙмәткә түләүҙе арттырыу тураһында ҡарар пандемияға бәйле сикләүҙәрҙе иҫәпкә алып ҡабул ителде. Йыл аҙағына хәл үҙгәрҙе, санкцияларҙың граждандар именлегенә йоғонтоһон иҫәпкә алып, сумма арттырылды. Бынан алдараҡ "Башинформ" 2024 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен 18,5 процентҡа индексациялауҙары тураһында хәбәр иткәйне.

✓ **Дәүләт Думаһы депутаттары 11 апрелдә балиғ булмағандарға вейп һатыуҙы тыйған закон ҡабул итте.** Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин үҙенең телеграм-каналында ошо хаҡта белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, закон сығарыусыларҙың күпселеге әлеге башланғысты хупланған. "Был бит балаларыбыҙҙың һаулыҡ мәсьәләһе. Вейп өсөн шыйыҡсаларҙа ауыр металдар, башҡа химик матдәләр бар, уларҙың организмға әлэгеүе яман шеш барлыҡҡа килеү ҡурҡынысын бермә-бер арттыра. Вейптың ағыулы быуҙары тын алыу юлдарының тарайыуына сәбәпсе була", - тип хәбәр итте парламент рәйесе.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КИТАП БАЙРАМЫНА КИЛ!




**26-28 майҙа Өфөлә тәүге тапҡыр "Китап-байрам" халыҡ-ара китап йәрминкәһе уҙғарыла. Сара бер нисә майҙансыҡта ойоштороla.**

Уларҙың береһендә - М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты янында "Башҡортостандың сигелгән картаһы" республика проектының презентацияһы була. Хәбәр ителеүенсә, картаны осталар тулыһынса сигеп эшләй. Унда муниципалитеттарҙың тәбиғәт ҡомартҡыларынан тыш, уларҙың биләмәһендә йәшәгән халыҡтарҙың үҙенсәлекле йолаларын күрергә мөмкин буласаҡ.

- Проект Башҡортостан Башлығы грантына бойомға ашырыла. Муниципалитеттарҙың мәҙәниәт бүлектәре вәкилдәренең, осталарҙың, рәссамдарҙың һәм дизайнерҙарҙың гәйәт ҙур эше был. Картаның ҙурлығы - 1,5 метрға 2 метр. Унда республиканың 54 районы һүрәтләнгән. Эштә төрлө материалдар: ярым аҫыл таштар, сәйлән, таҫмалар, күн, кейеҙ, алтын һәм көмөш ептәр, сигеү техникаһы файҙаланыла. Проект күп милләтле республиканың берҙәмлеген, уның бай мәҙәни мираҫын, эштә лә, сәнғәт аша ла берләшә алыуын күрһәтә, - ти проекттың кураторы, Республика халыҡ ижады үҙәгенең бүлек мөдире Зарина Хәсәнова.

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Китап-байрам" халыҡ-ара йәрминкәһе барышында Башҡорт дәүләт педагогия университетында өс көн дауамында "Сигеү. Башҡарыу техникаһының төрлөлөгө һәм үҙенсәлектәре" тигән темаға семинар ойоштороласаҡ. Совет майҙанында, Милли музейҙа, Милли китапханала, шулай уҡ нәшриәттәрҙең һәм китап магазиндарының күргәҙмә майҙансыҡтарында төрлө саралар: китап һатыу-күргәҙмәһе, осталыҡ дәрестәре, авторҙар менән осрашыуҙар, тасуири уҡыу конкурстары, иң яҡшы әҫәрҙәр буйынса моноспектаклдәр, экранлаштырыуҙар була.

# УРАМҒА СЫҠМАЙ ҒЫНА...



**"Рәсәйҙең үлемһеҙ полкы" хәрәкәтенең төбәк штабы етәксеһе Вадим Курилов "Башинформ" хәбәрсеһе менән әңгәмәлә билдәләүенсә, Башҡортостанда, үҙәк штабтың тәҡдиме буйынса, "Үлемһеҙ полк" акцияһы ойошторолмай. "Традицион марш булмай. Беҙгә яңы форматтар тәҡдим иттеләр. Бының сәбәбен әлегә белмәйбеҙ, бәлки, хәүефһеҙлек менән бәйлелер", - тине Вадим Курилов.**

"Хәүефһеҙлек маҡсатында быйыл "Үлемһеҙ полк" башҡа форматтарҙа уҙғарыла, - тип белдерҙе "Россия сегодня" медиатөркөмөнөң халыҡ-ара матбуғат конференцияһында "Рәсәйҙең үлемһеҙ полкы" үҙәк штабы рәйестәше Елена Цунаева. - 9 май - байрам, Тыуған илебеҙҙе һаҡлаған геройҙарҙың портреттары был көндөң төп үҙенсәлеге булып тора. Һәр кем "Үлемһеҙ полк"тың үҙенә уңайлы форматын һайлап, үҙ геройы тураһында һөйләргә мөмкин".

Шуларҙың береһе - автомобилселәр өсөн "Үлемһеҙ полк", тиелә "Енеү ирекмәндәре" Бөтә Рәсәй йәмәғәт хәрәкәтенең рәсми сайтындағы белдереүҙә. Акцияла граждандар ғына түгел, ә тотош структуралар - йәмәғәт транспорты хеҙмәттәре, хоҡуҡ тәртибе өсөн яуаплы ведомстволар, такси, йөк ташыу, янғын һағы, ашығыс медицина ярҙамы, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре һәм башҡалар ҡатнаша ала. Елена Цунаева социаль селтәрҙә ғаилә геройҙары тураһында ла һөйләргә саҡырҙы: "Беҙгә геройҙарыбыҙҙың тарихын онотмаҫҡа кәрәк. Нәҡ беҙ уларҙы быуындан-быуынға тапшырабыҙ, тап улар Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тарихи дөрөҫлөктө раҫлай", - тип билдәләне ул.

# МИҘАЛЫ ЛА БУЛҺЫН!



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары закон проекты менән республикала яңы дәүләт наградаһын - генерал Шайморатов миҙалын булдырырға тәҡдим итә.**

Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, был награда йәмәғәт тәртибен һаҡлағанда, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә кешеләрҙе ҡотҡарғанда, ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, граждандыҡ йәки хеҙмәт бурысын үтәгәндә күрһәткән ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ өсөн тапшырыла. Бер үк ваҡытта закон проекты менән ошо исемдәге орден менән бүләкләү өсөн нигеҙҙәр аныҡлана. "Генерал Шайморатов ордены республиканың ошо уҡ исемдәге миҙалға ҡарата юғары дәүләт наградаһы булыр тип күҙ уңында тотола, - тине Константин Толкачев. - Орден менән ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, граждандыҡ йәки хеҙмәт бурысын үтәгәндә фиҙаҡәрлек һәм батырлыҡ күрһәткән граждандар бүләкләнә". Асыҡланыуынса, закон Башҡортостан бюджеты иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

# ГАЗ ҮТКӘРҘЕҢМЕ ӘЛЕ?




**"Газпром" менән килешеү буйынса 15 ҡасаба-ара газ үткәргес төҙөлөшө өҫтәмә рәүештә Башҡортостандың газ үткәреү программаһына индерелде.**

Был Ҡариҙел, Баймаҡ, Әбйәлил, Яңауыл, Асҡын, Иглин, Ишембай, Тәтешле һәм Ҡырмыҫҡалы райондарының 18 тораҡ пунктына газ үткәрергә мөмкинлек бирергә тейеш. "Газ үткәреү программаһы 2021-2025 йылдарға иҫәпләнгән. Дөйөм алғанда, яңыртылған документ 1 мең саҡрымдан ашыу ҡасаба-ара газ үткәргес төҙөүҙе күҙ уңында тота. Был республиканың 33 районындағы 181 тораҡ пунктҡа газ үткәреү мөмкинлеген бирәсәк. Киләсәктә 26 мең йортто тоташтыра алырбыҙ. Мөһим проекттар иҫәбендә - "Шүлгәнташ" музей комплексы урынлашҡан "Бөрйән" туристик кластерына газ үткәреү", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Башҡортостанда Рәсәй Президенты башланғысы менән социаль газ үткәреү программаһы ла эшләй. Ул йорт биләмәләре сигенә бушлай газ үткәреүҙе күҙ уңында тота. Республикала газға тоташтырыуға 100 мең һум күләмендә сертификаттар тапшырыу дауам итә.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Башкиравтодор" дәүләт компанияһы юл ремонт-төҙөләш идаралыҡтарының 37 белгесе Луганск Халыҡ Республикаһына юлланды. Луганщинала улар дөйөм оҙонлоғо 30 саҡрымға яҡын 16 юл участкаһын ремонтларға тейеш. Барып еткәс, улар былтыр килтерелгән асфальт-бетон заводының эшен башлай. Заводтың етештереүсәнлеге - көнөнә 300 тонна асфальт-бетон ҡатнашмаһы. Уҙған миҙгелдә Башҡортостан юлсылары 40 саҡрым юлды ремонтлаған.

✓Өфөлә Ағиҙел яры буйында йылға вокзалын төҙөү ҡарала. Баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, Өфө - эшлекле һәм ваҡиғалар туризмы йәһәтенән Рәсәйҙең лидер ҡалалары иҫәбендә, ҙур конгресс һәм күргәҙмә майҙансығы булып тора. Өҫтәүенә, сәнғәт, гастрономия, медицина, әүҙем туризм үҫешә. Круиз туризмы тергеҙелә. "Былтыр 80 мең самаһы кеше һыу транспорты менән файҙаланған. Шуға ла яҡын киләсәктә Ағиҙел яры буйында йылға вокзалын төҙөү бурысын ҡуйҙыҡ", - тип белдерҙе Өфө мэры.

✓Башҡортостанда Херсондан күскенселәр 104 миллион һумлыҡ торлаҡ сертификаттары алды. Был хаҡта республика Хөкүмәте ултырышында премьер-министр Андрей Назаров белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостанда даими йәшәгән урынын ҡалдырып китергә мәжбүр булған Херсон һәм өлкә халҡына ярҙам күрһәтеү буйынса эш дауам итә. Бөгөнгә дәүләт ярҙамы сараларын күрһәтеү тураһында 92 ғариза ҡабул ителгән. Уларҙың 50 проценты - торлаҡ сертификатын алыу өсөн.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропорты Тажикстандың баш ҡалаһынан беренсе рейсты ҡаршы алды. Юлға 2 сәғәт 50 минут ваҡыт китә. Даими осоштар 189 пассажирға иҫәпләнгән уңайлы Boieng 737-800 самолеттарында башҡарыла, тип хәбәр иттеләр Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтенән. Авиакомпания Башҡортостандың баш ҡалаһынан маршруттар селтәрен әүҙем үҫтерә. Әле Өфөнән Санкт-Петербургҡа, Сочиға, Түбәнге Новгородҡа, Махачкалаға тура рейстар башҡарыла.

✓Башҡортостан спортсыһы, донъя чемпионы Алһыу Минәзева "Точикистон слалом опен" ишеү слаломы буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа еңеү яуланы. Халыҡ-ара турнир Дүшәмбе ҡалаһынан алыҫ түгел Варзоб йылғаһында уҙа. Ярыштарҙа Таиланд, Белоруссия, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстан, Һиндостан һәм Рәсәй командалары ҡатнаша.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Республикала "Атайсал" проектын тормошҡа ашырыу республика етәксеһе Радий Хәбировтың "Яҡташтарҙың берҙәмлегенә, уларҙың оло һәм кесе ватанына һөйөүенә ышанам", тигән инаныуы һәм тәҡдиме менән башланып киткәйне. "Атайсалға- изге ғәмәлдәр" йылы тип нарыҡланған 2023 йыл да үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәткән проект эштәренә бай булмаҡсы. Быны Баймаҡ районында Межгорье, Сибай ҡалалары, Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Йылайыр, Ейәнсура, Учалы һәм Хәйбулла райондары ҡатнашлығында үткән "Кесе ватаным - Атайсал" муниципаль-ара форумының алтынсы этабы сараһы ла раҫланы.**

# АТАЙСАЛ...

## ул көс туплай торған урын



*БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тыуған Бөрйән районы балаларына милли костюмдар бүләк итте.*

Форумдың пленар ултырышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Таһир улы Килсенбаев "Атайсал" проекты буйынса ҡыҫҡаса телмәр тотоп, шулай тигәйне: "Атайсал нимә ул?" тигән һорауға яуап эҙләгәндә иң тәүҙә, әлбиттә, ул атай йорто булып күҙ алдына баҫа. Атайсал - ул төп нигеҙ. Ул - тыуған йорт. Ул - тыуған урам. Бала сағың үткән урын. Тыуған тәбиғәт. Атайсал - ул илһам һәм көс туплай торған урын. Атайсалды бына шулай һәр кем үҙенсә күҙаллай. Ә "Атайсал" проекты - ошо һәр кемдең кендек ҡаны тамған ергә ҡулынан килгәнсә ярҙам күрһәтеүе ул. Проекттар башлыса шишмәләрҙе тергеҙеүгә, мәсет, сиркәү төҙөү, зыяраттарҙы тәртипкә килтереүгә, төрлө спорт турнирҙары үткәреүгә һәм башҡа ғәмәлдәргә ҡайтып ҡала. Йәғни, кеше атайсалы өсөн күптән эшләргә теләгән эштәрҙе тормошҡа ашыра. "Атайсал" проекты - ул аҡса түгел, эш иҫәбе лә түгел, ул иң тәүҙә - хис-тойғолар. Ул яҡташтар, ауылдаштарҙың шатлығы..."

Шулай итеп, Баймаҡта үткән форумда ла һәр районда, ҡалала тыуған яҡ өсөн башҡарылған һәм башҡарыласаҡ әһәмиәтле һәм ҡыҙыҡлы проекттар тураһында һөйләнеләр. Мәҫәлән, "Атайсал" проекты ярҙамында Сибайҙарҙың хәҙер үҙ Бәхет шишмәһе бар. Эшҡыуар Дамир Ғиззәтуллин шишмә буйын таҙартҡан һәм төҙөкләндергән. Урындағы халыҡ өсөн был изге урын булып һанала хәҙер. "Проектта эшҡыуарҙар, ҡала халҡы, хеҙмәт коллективтары, йәмәғәт ойошмалары, депутаттар, урындағы үҙидара хеҙмәткәрҙәре әүҙем ҡатнашты. Әлеге ваҡытта сибайҙар 97 проект тәҡдим иткән, уларҙың 59-ы тормошҡа ашырылған", - ти Сибай тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры Альбина Ярмуллина.

Йылайыр районында иһә "Атайсал" проектын ғәмәлгә ашырыуҙы хакимиәт башлығы Борис Мелкоедов үҙе контролдә тотҡан. Тап уның башланғысы менән 2022 йылдың ноябрендә Быҙаулыҡ һыуһаҡлағысына төрлө балыҡтар үрсетеүгә ебәрелгән. 2021 йылда йылайырҙар изге эштәр өсөн 1 миллион 360 мең һум аҡса йыйған, 2022 йылда дөйөм суммаһы 3 миллион 616 мең һумлыҡ проекттар тормошҡа ашырылған. Меценаттар ғибәҙәтханаларҙы, мәсеттәрҙе, футбол майҙансыҡтарын төҙөкләндергән, һәйкәлдәр ҡуйған. Шул иҫәптән үҙенсәлекле арт-объект, ҡурайға арналған композиция ла барлыҡҡа килгән. 2023 йылда 4 миллион һумдан ашыуға эштәр башҡарыу планлаштырыла.

Белорет районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Эльза Мөхәмәҙиева әйтеүенсә, ошо проект сиктәрендә Белоретта ауыл һәм ҡасаба-ара спорт ярыштары үткәрелә башлаған. "Күпселектә - башҡорт милли спорт уйындары үтте, сөнки урман яҡтары ауылдарының төп халҡы - башҡорттар. "Бәйге" башҡорт күпбәйгеһе ошо ярыштарҙың иң әһәмиәтлеһе булып тора. Ул ауылдың сәләмәт тормош алып барған ир-егеттәре өсөн берләштереүсе фактор ҙа, район кимәлендәге ваҡиғалар туризмы сараһы ла була алды, тип иҫәпләйбеҙ..." - тине ул.

Форумдың республика "Ағинәй" һәм "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмалары ағзалары секцияһы Баймаҡ үҙәк китапханаһында үтте. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева ҡатнашыусыларҙы эшлекле һөйләшеүгә, фекер алышыуға саҡырып, шулай тине: "Ошо ойошманы ойоштороған ваҡытта уның ағзалары алдына ауылдарыбыҙҙың йәшәйеш утын, ҡотон һаҡлау, ундағы тормош ағышын күҙ менән ҡаш араһында тотоу бурысы ҡуйылғайны. Был бурысты атҡарыуҙың бихисап саралары билдәләнгәйне. Беренсенән, һәр ҡатын-ҡыҙ кәсепле, һөнәрле булып, уны йәшәйешенең төп шөғөлө тип иҫәпләгән. Быға тиклем кәрәкмәгән шөғөл тип ташлап ҡуйыла яҙған балаҫ һуғыу, кейеҙ баҫыу, сигеү-бәйләү-тегеү кеүек кәсептәр, һарыҡ йөнө кеүек күп төрлө файҙалы һәм кәрәкле кейем-һалым сеймалы ҡулланылышҡа ҡайтарылды. Халҡыбыҙҙың тәрбиә мәктәбе аяҡҡа баҫтырылды. Милли ашһыуҙарға, милли кейем һәм биҙәүестәргә, йолаларға яңынан йөҙ боролдо. Ҡыҫҡаһы, ағинәйҙәр алдына ҡуйылған бурыстар үтәлде, үтәлә. Улар бөгөн ауылдарҙың утын һәм ҡотон, милләттең бәҫен, ырыҫын һаҡлаусы төп көскә әйләнде. Ә бына ир-егеттәргә атай-олатайҙарҙың бик күп бурыстарын тергеҙәһе бар әле. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров был "Ир-егеттәр ҡоро"н ойоштороуға ең һыҙғанып тотоноп, бик дөрөҫ эшләне. Ағинәйҙәр һеҙгә ярҙам итергә, шулай уҡ һеҙҙең дә ярҙамдан файҙаланырға бик шат булыр..."



*Баймаҡ районы эшҡыуарҙары Илсур Нәбиуллин һәм Руслан Таһиров яҡташтарына бүләк итеп шифаханаға путевкалар тапшырҙы.*

Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Йома" тапшырыуын алып барған Морат Лоҡманов форумда "Айыҡ ауыл" проектын тормошҡа ашырғанда дин әһелдәре менән хеҙмәттәшлек итеү тәжрибәһе хаҡында һөйләне һәм "Айыҡ ауыл" проектының кураторҙарына мөрәжәғәт итеп, шулай тине: "Юғары мөфтөй, Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт хәҙрәт Тажетдин һәм Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе Айнур хәҙрәт Бирғәлин менән был проектта мөхтәсибтәрҙең ҡатнашыуы тураһында юғары кимәлдә һөйләшеү ойоштороға, йә килешеү төҙөргә кәрәк. Еңеүселәрҙе билдәләгән, бәйгене баһалаған саҡта ла, башҡа критерийҙар менән йәнәшә ауылда мәсет эшмәкәрлеген иғтибарға алырға тәҡдим итәм. Ни өсөн тигәндә, элек-электән халыҡты эскелектән һаҡлаған төп ҡорал - ул дин. Бөгөн эсеүен ташлағандарҙың да күбеһенә ул этәргес булды..."

"Бәләкәй Ватаным - Атайсал" форумдары сиктәрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ундағы ике секция майҙансығы эше өсөн яуаплы булды. Уларҙа яҡташтар берләшмәләре һәм ауылдың стратегик үҫеше мәсьәләләре ҡаралды. Ҡоролтайҙың бар донъялағы йәмәғәт ойошмалары һәм яҡташтары менән үҙ-ара эш итеү тәжрибәһе, билдәле маҡсатлы аудитория өсөн мөһим саралар уҙғарыу тәжрибәһе, әлбиттә, "Атайсал" проектын лайыҡлы атҡарыуға нигеҙ булып тора. Үҙ сығышында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов республиканан ситтәге яҡташтар һәм ватандаштарыбыҙ институтын Башҡортостан тормошона йәлеп итеү һәм муниципаль берәмектәр үҫешенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре мәсьәләләрен айырып билдәләне. "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы баштан уҡ тотош Ер йөҙөндәге башҡорттарҙы берләштереүсе кәңәшмә органы булараҡ ойошторолдо, - тине ғалим булараҡ республика һәм муниципаль кимәлдәге бер нисә стратегик документты әҙерләүҙә ҡатнашҡан, Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын әҙерләүҙе ойоштороусыларҙың береһе Юлдаш Мөхәмәт улы.- Хәҙер беҙ донъяның илле илендә йәшәгән һәм шулай уҡ Рәсәй төбәктәрендәге ватандаштарыбыҙ менән бәйләнеш тотабыҙ. Яҡташтарҙың тергә ябай булмаған осорҙарҙы еңеп сығырға ғына түгел, киләсәккә ҡыйыу ҡарарға ла мөмкинлек, нигеҙ бирә. Үҙ-үҙеңә, күршеңә ышанмайынса, биләмә стратегияһы төҙөү мөмкин түгел. Еңеү өсөн ерҙә ышаныслы баҫып торорға - стратегик планлаштырыу законы булдырырға кәрәк..."

**Әйткәндәй, "Кесе ватаным - Атайсал" муниципаль-ара форумдар циклы былтыр 18 ноябрҙә Асҡында башланғайны. Форумдың икенсеһе былтыр 9 декабрҙә - Ҡырмыҫҡалыла, өсөнсөһө быйыл 18 февралдә - Туймазыла, дүртенсеһе ике аҙна элек Мәләүеҙдә үтте. Форумдар теҙмәһе Баймаҡ районында тамамланды. Киләһе сара 4 майҙа Өфөлә ойошторола саҡ.**

**Айгөл СӘЛИХОВА.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ашҡаҙан яман шеше

❖ Бәпембә (одуванчик), кесерткән, меңъяпраҡ һәм юл япрағы япраҡтарының һуттарын һығып алып, бер тигеҙ миҡдарҙа бергә ҡушырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс, 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланғас, 1 ай туҡтап торорға. Башҡа төр саралар менән бергә ҡулланырға.

## Полиартрит

❖ 3-3,5 кг сельдерей тамыры, 700 грамм керән, 500 грамм лимонды (әрсемәҫкә) барыһын да ит турағыстан үткәреп, һутын һығып алырға һәм 700 грамм бал ҡушырға. 10 көн төнәтергә. Һыуытҡыста тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу 3 айға һуҙыла һәм һөҙөмтәһе яҡшы.

❖ 50 грамм лавр япрағын йыуып, һалҡын һыуҙа сайырға, шунан эмалле кәстрүлгә һалып, 250 мл һыуыҡ һыу ҡойорға. Талғын ғына утта һыуы 1-1,5 смға кәмегәнсе ҡайнатырға. Шунан һөҙөп алырға һәм ҡайнатманы 4 тигеҙ өлөшкә бүлергә, мәҫәлән, рюмкаларға ҡойорға. Көн дауамында 1 рюмкаһын әҙ-әҙ генә уртлап, ауыҙҙа тотоп-тотоп эсеп бөтөргә. 4 көн рәттән теләһә ҡайһы ваҡытта эсергә. Был дауаны тағы 1-1,5 йылдан ҡабатларға кәрәк.

## Баҡса петрушкаһы

❖ Һыу сәсәгенән (ветряная оспа) 1 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә йәки 1 балғалаҡ тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм һөҙөргә. Балаға көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсерергә. Петрушканың бөтә төрө лә ярай. Төнәтмә тиҙерәк һауығырға ярҙам итә.

❖ Ҡыҙылса (корь) менән ауырығанда петрушканың тамырын ваҡлап, 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ауыҙын ябып 6-8 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм балаға ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсерергә.

❖ Һимереү менән яфаланғанда көн һайын 1-әр стакан яңы петрушка сәйен эсергә. Бының өсөн 1-2 балғалаҡ йәшел япраҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Бер нисәгә бүлеп эсергә була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Исемлеккә ингән предметтар буйынса олипиадаларҙа ҡатнашып, призер булыусылар ӨДНТУ-ға уҡырға инһә, уларға беренсе курста ай һайын төп стипендияға өҫтәмә рәүештә 60 мең һум стипендия түләнә.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Ҡушымта

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Учалы ҡалаһы. Оҙонлоғо 37 см, өҫкө киңлеге 22 см, аҫҡы киңлеге 30 см, ауырлығы 750 г. Биҙәүестә барлығы 196 элемент. Шуларҙың 41-е - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Учалы ҡалаһы. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 25 см, аҫҡы киңлеге 38 см, ауырлығы 1567,0 г. Биҙәүестә барлығы 345 элемент. Шуларҙың 16-һы - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Учалы 2. Оҙонлоғо 37 см, өҫкө киңлеге 20 см, аҫҡы киңлеге 30 см, ауырлығы 1445,7 г. Биҙәүестә барлығы 382 элемент. Шуларҙың 58-е - көмөш.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ*

# МАҠСАТЛЫЛАР МӨХИТЕНДӘ...

## белем ала был балалар

**(Башы 1-се биттә).**

Республика инженер лицей-интернаты уҡытыусыларының эш һөҙөмтәһен Башҡортостан Республикаһы Башлығы стипендияһын һәм премияһын алыусы һәләтле балалар һанының йылдан-йыл артыуы ла раҫлай. Һуңғы өс йылда уҡыуҙа, Халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй кимәлендә үткән олимпиадаларҙа, ғилми-ғәмәли конференцияларҙа ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән, йәмәғәтселек эшендә әүҙем ҡатнашҡан, ижади, спорт бәйгеләрендә еңеү яулаған 31 уҡыусы стипендиат исеменә, ә 93 уҡыусы Башҡортостан Республикаһы Башлығы премияһына лайыҡ булды. Быйыл балаларҙың интеллектуаль һәләтен үҫтереү маҡсатында булдырылған Башҡортостан Республикаһы Башлығы стипендияһын химия, информатика, физика, математика, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте, география, экология фәндәренән Халыҡ-ара, төбәк-ара, Рәсәй кимәлендә үткәрелгән олимпиадаларҙа еңеүсе һәм призерҙар булған 11 уҡыусы (10-сы синыфтан Нуртдинов Артур, Микрюков Глеб, Шәмсетдинов Радомир, Моталов Ильяс, Харисов Вадим, Сөләймәнов Карам, Миңнажев Артем, Зиновьев Александр, Даминов Камил, Абдисова Камилла, 11-се синыфтан Сәйфуллин Искәндәр) алды, һәм лицеистарҙың үҫешенә күп көс һалған уҡытыусылар бүләкләнде.

**➔ Ысынлап та, бөгөн Республика инженер лицей-интернатының даны республикала ғына түгел, Рәсәйҙә лә билдәле. Ошо атап үткән ҡаҙаныштар үҙе үк белем сифатын да асыҡ күрһәтеп тора...**

- Республика инженер лицей-интернаты белем сифаты буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы 500 уҡыу йорто исемлегенә инә, ә химия, физика фәндәре буйынса илдең иң яҡшы 100 мәктәбенең береһе һанала. Рейтинг төҙөгәндә Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса уртаса мәрәй, уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында һәм төрлө конкурстарҙа яулаған һөҙөмтәләр, Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына инеү күрһәткестәре иҫәпкә алына. Шулай уҡ быйыл "Сириус" белем биреү үҙәге һәм Мәскәү ҡалаһының математик белем биреү үҙәге Olimpiada.ru порталы менән берлектә математика һәм тәбиғи фәндәр өлкәһендә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән иң яҡшы 200 мәктәп исемлеген төҙөнө. Ошо рейтинг буйынса Республика инженер лицей-интернаты Рәсәй Федерацияһының 59 төбәге мәктәптәре араһында иң яҡшы 200 белем усағы араһында лайыҡлы урын алып тора. Лицей 2021-2022 уҡыу йылы һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан төҙөлгән Топ-10 рейтингында инновациялы алымда эшләгән иң яҡшы уҡыу йорто тип билдәләнде.

**➔ Һеҙҙең уҡыусылар ил кимәлендә ҙур уңыштар яулай. Бер нисәһе менән таныштырып китәйек, булмаһа...**

- Эйе, уҡыусыларыбыҙҙың әле атап үткән фәндәр буйынса ҡаҙаныштары ҙур. Мәсәлән, Вадим Харисов химия фәненән Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ил кимәлендә еңеү яулап, Рәсәй йыйылма командаһына инде һәм әлеге ваҡытта Халыҡ-ара олимпиадала ҡатнашырға әҙерләнә. Шулай уҡ ул химия буйынса М.В. Ломоносов, "Йәш таланттар", Газпром, Ҡазан федераль университеты, Мәскәү олимпиадалары еңеүсеһе лә. Математика, информатика өлкәләрендә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән Камил Даминов RMI һәм ИНФО Халыҡ-ара олимпиадаларында бронза миҙал яулаған, Когнитив технологиялар олимпиадаһы еңеүсеһе тип танылды, Бөтә Рәсәй олимпиадаһының төбәк этабында информатика буйынса еңеүсе, математика буйынса призер тип билдәләнде. Мәҡсүтов Фаил химия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһының төбәк этабы призеры булды, ә 9-сы синыф уҡыусыһы Эмиль Ғәлинуров был сараның йомғаҡлау этабына барып етте. Мәғлүм булыуынса, еңеүселәр Башҡортостан Башлығы премияһына лайыҡ булыуҙан тыш, профиль буйынса илдең теләһә ҡайһы юғары уҡыу йортона имтиханһыҙ инә ала. Бынан тыш, вузда уҡығанда Рәсәй Президенты грантын алыуға дәғүә итеү мөмкинлектәре бар. Өфө дәүләт нефть-техник университетына уҡырға инһәләр, беренсе курста уларға айына 100 мең һум стипендия түләнә.

**➔ Һеҙҙең лицей республикала билдәле булған Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы ағзаһы ғына түгел, уның нигеҙен тәшкил итә, тиергә мөмкин. Ошо хәрәкәт тураһында ла һөйләп китегеҙ әле.**

- Химия буйынса уҡыусыларҙы олимпиадаларға әҙерләүҙә остаз булып үҙе әле генә шундай уҡ Бөтә Рәсәй олимпиадаларында йәки федераль исемлектә булған олимпиадаларҙа ҡатнашҡан, призер булған, еңеү яулаған вуз студенттары тора. Улар уҡыусылар менән тиҙ уртаҡ тел таба, үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән бүлешә. "Олимпиадала ҡатнашыусынан - остазға" юлы - остаз булыуҙың бер варианты. Республика инженер лицей-интернаты базаһында ойошторолған Өфө дәүләт нефть-техник университеты предуниверсарийында (ошо уҡыу йортона инеүгә әҙерлек урыны) ошо уҡыу йортоноң олимпиадалар еңеүселәре һәм призерҙары булған 22 студентынан торған Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы (АНОД) эшләй. Ошо 22 студенттың 19-ы - РИЛИ тамамлаусылар.

АНОД сиктәрендә студенттар һәм уҡытыусылар уҡыусылар өсөн химия фәне буйынса йәкшәмбе мәктәптәрендә уҡыта, бушлай дәрестәр, лаборатор практикумдар үткәрә, республикала Бөтә Рәсәй олимпиадалары майҙансығы, уҡыу-күнекмә йыйындары, йәйге мәктәптәр ойоштора. АНОД уҡыусыларының бер өлөшө ӨДНТУ-ға уҡырға инә һәм артабан үҙҙәре остаз булып китә. АНОД арҡаһында республиканың химия командаһының уҡыусылар араһында уҙғарылған Бөтә Рәсәй олимпиадаһында һөҙөмтәләре өс тапҡырға күтәрелде. Беҙ балаларҙы уҡыу программаһынан тыш шөғөлләнергә мәжбүр итмәйбеҙ. Улар үҙҙәре көҙгө һәм ҡышҡы каникулдарҙа лицейҙа ҡалып, йәкшәмбе мәктәбенә йөрөй.

Олимпиадаларҙа ҡатнашып еңеү яулаған уҡыусыларҙың мөмкинлектәре тураһында әйтеп киттем инде, тағы шуны ла өҫтәр инем: Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем министрлығының исемлегенә ингән предметтар буйынса олипиадаларҙа ҡатнашып, призер булыусылар ӨДНТУ-ға уҡырға инһә, уларға беренсе курста ай һайын төп стипендияға өҫтәмә рәүештә 60 мең һум стипендия түләнә.

**➔ Һеҙҙең өсөн остаз кем ул?**

- Остаз - ул йүнәлеш биреүсе, һине ниндәйҙер һөҙөмтәгә тиклем алып барыусы һәм ҡиммәттәрҙе тапшырыусы. АНОД студенттары өсөн ҡиммәттәр йүнәлеше булып Рәсәй Федерацияһының халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әгәҙуллинаның "Изге дәрестәре" тора. Уның дәрестәренән һуң уҡыусылар яҡшы яҡҡа үҙгәрә - эшләргә теләк тыуа, һәр кем үҙенең маҡсатын күрә. АНОД остаздары ҡасандыр үҙҙәре Лиза Ҡыям ҡыҙының уҡыусылары булып, хәҙер уның методикаһы буйынса эшләй. Ул олимпиадаларҙа ҡатнашыусылар һәм уларҙы әҙерләүселәрҙең остазы булып тора.

**➔ Әңгәмәне уҡыған уҡыусылар араһында, бәлки, "Их, шул лицейҙа уҡыйһаң ине!" тигән хыял да тыуыр. Һеҙҙең уҡыу йортона ҡабул итеү талаптары ниндәй?**

- Беҙ 5-9-сы һәм 10-сы синыфҡа уҡыусылар ҡабул итәбеҙ, бының өсөн 5-7-се синыфтар математика, рус теле, инглиз теленән тест үтергә тейеш. 8-9-сы синыфтарға ошо предметтарға өҫтәп, физика фәненән дә һынау буласаҡ. 10-сы синыфҡа өс йүнәлеш буйынса уҡыусылар ҡабул итәбеҙ. Технология профиле буйынса математика, рус теле, информатика һәм физиканан тест үтергә кәрәк. Тәбиғифәнни профиль - математика, рус теле, биология һәм химия. Социаль-иҡтисади профиль - математика, рус теле, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү. 5-9-сы синыфҡа һайлап алыу 1 апрелдән 15 июнгә тиклем дауам итһә, 10-сы синыфтарға - 20 июндән 30 июлгә тиклем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Уҡыусылар беҙгә килгәс тә уҡ уҡый, олимпиадала ҡатнаша торған мөхиткә эләгә", - ти Айнур Зиннур улы. Ысынлап та, белем усағының белем сифатын, яулаған ҡаҙаныштары, уңыштарын күреп тә шундай һығымта яһарға була. "Һәр кем ундай уңыш ҡаҙана алмай", - тиер, бәлки, күптәр. Әммә РИЛИ-ҙа Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙының методикаһын, уның тормош ҡиммәттәрен, күп йылдар дауамында туплаған тәжрибәһен ҡулланалар һәм уҡыусыларҙа үҙ көсөнә ышаныу, өмөт тәрбиәләйҙәр, бейеккә осорға ҡанат ҡуялар, маҡсатлылар мөхите булдыралар.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

✓ *Археология материалдары Себер, Урал һәм Волга буйының урмандары һәм урманлы далалары сиктәрендә йөҙәрләгән яңы типтағы ҡомартҡыларҙың хасил булыуын аныҡ күрһәтә.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



#### Дала зонаһы күскенселәре

Б.э. тиклем III-II быуаттарҙа Көньяҡ Урал һәм Волга буйы далаларында малсылыҡ менән шөғөлләнгән ерле ҡәбиләләрҙең барса мәҙәни тормошона етди үҙгәрештәр индергән ҡатмарлы тарихи ваҡиғалар булып уҙа. Ҙур ер ҡурғанлы һәм ҡатмарлы тәҙәләшлә (дромослы) ҡәберҙәрҙән торған дах-сак-массагет ҡәбиләләре зыяраттарын ябай ғына, бәләкәй ҡәберҙәр өҫтөндә ҙур булмаған ҡурғандары булған ҡәберлектәр алыштыра. Ҡәберҙәрҙең квадрат соҡорло төрө барлыҡҡа килә, унда мәйеттәрҙе элеккесә оҙон стена буйлап түгел, ә диагональ буйынса, башын көньяҡҡа ҡаратып ерләйҙәр. Традицияға ярашлы, ошондай ҡәберҙәрҙең стеналары бүрәнә менән бурала, шул уҡ ваҡытта уларҙың агас ҡабығы менән ҡапланыу осраҡтары ла күҙәтелә (Имәнғол, Ырымбур). Ҡурғандарҙың инвентары элекке осорҙарҙыҡыларынан сағыштырмаса ярлыраҡ, ул балсыҡ һауыт-һабанан, уҡ башаҡтарынан, хәнйәрҙәрҙән һәм һаптарының ос ағы түнәрәкләтеп эшләнгән ҡылыстарҙан тора. Балаларҙың маңлайҙарын ҡыҫып бәйләнгән киң таҫма-ҡоршауҙа тотоп, баш һөйәктәрен деформациялау шулай уҡ яңы күренеш була. Һөҙөмтәлә кешенең башы оҙонса форма ала. Б.э. тиклем II-I быуаттарға ҡараған байтаҡ ҡына Көньяҡ Урал ҡурғандарында ошолай итеп оҙонайтылған баш һөйәктәре табылған (Мечетсай, Темәс), Түбәнге Волга буйында улар байтаҡҡа күберәк осрай, уларҙың ҡайһы берҙәренең монголоид һыҙаттары ла бар. Әле аталып кителгән яңылыҡтар барса Көньяҡ Урал төбәгенең күсмә ҡәбиләләренә (Көнсығыш Урал аръяғын да индереп) берҙәй хас, һәм был уларҙың мәҙәниәтенең оҡшаша барыуын күрһәтә. Уларҙың мәҙәни тормошондағы ошондай етди үҙгәрештәрҙе б.э. тиклем III-II быуаттар сигендә сак-дах-массагет ҡәбиләләренең ҙур бер өлөшөнөң Көньяҡ Урал һәм Волга буйы далаларынан Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйҙарына күсеп китеүе менән аңлатып була, ә унда ошоға тиклем скиф ҡәбиләләре йәшәгән. Көнсығыштан килгән күсмә ҡәбиләләр скифтарҙы тар-мар итә, һөҙөмтәлә унда сармат мәҙәниәте хасил була, ә был яңы тарихи хәлде барлыҡҡа килтерә.

Сак-дах-массагет ҡәбиләләренең көнбайышҡа табан йүнәлеүенең сәбәбе ниҙә булған һуң? Күрәһең, быныӊ бер нисә сәбәбе булғандыр, әммә ошо дәүерҙә Үҙәк Азияла ҡеүәтле гун дәүләтенең күтәрелеүе төп фактор булып тора.

Үҙәк Азияның күсмә ҡәбиләләренең берләшеүе б.э. тиклем IV быуатта башлана, ә император Модэ (б.э. тиклем 206 йылда власҡа килә) хакимлыҡ иткәндә был берләшмә сәскә атыу осорон кисерә. Уның ғәскәрҙәре һуғыштарҙа уңыш ҡаҙана, һөҙөмтәлә Модэ заманына күрә үтә ҡеүәтле дәүләт төҙөй, уның көнбайыш сиктәре Көньяҡ Себергә һәм Көнсығыш Ҡаҙағстанға тиклем барып етә. Гундар власын Ҡытай императорҙарының таныуы һәм уға даими рәүештә яһаҡ түләүе факты ошо дәүләттең ниндәй көслө булыуын бик асыҡ күрһәтә.

Азия төпкөлдәре далаларында барған ваҡиғаларҙың көслө ауазы Евразия далаларына ла килеп етә. Аяуһыҙ һуғыш хәрәкәттәре барған ерҙәрҙә йәшәгән халыҡтар ҡырылып юҡ ителеү хәүефенән көнбайышҡа һәм төньяҡҡа табан ҡасып китеп ҡотолорға тырыша. Б.э. тиклем II-I быуаттарҙа, гундар империяһы эске ҡапма-ҡаршылыҡтар арҡаһында ныҡ көсһеҙләнгәс һәм улар араһында үҙ-ара һуғыштар башланғас, ошондай миграция процестары көсәйә бара. Гундарҙың төньяҡ төркөмә көньяҡтағыларынан еңелә, уларҙың күп меңле ҡәбиләләре көнбайыш тарафтарына, Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан, Урал-Волга буйы далаларына һәм Урта Азияға күсеп китергә мәжбүр була. Был күп төрлө ҡәүемдәрҙең хәрәкәтен тағы ла көсәйтә төшә.

Археология материалдары Себер, Урал һәм Волга буйының урмандары һәм урманлы далалары сиктәрендә йөҙәрләгән яңы типтағы ҡомартҡыларҙың хасил булыуын аныҡ күрһәтә, уларҙағы көньяҡ халыҡтарына хас булған әйберҙәр бында көньяҡтан яңы халыҡ төркөмдәренең үтеп инеүен дәлилләй. Шулай итеп, халыҡтар (ҡәбиләләр), телдәр һәм мәҙәниәттәрҙең яңынан үҙ-ара ҡушылыуы башлана, был процеста Үҙәк Азиянан сыҡҡан күсмә ҡәбиләләр әүҙем этәргес көскә әүерелә. Был "Халыҡтарҙың бөйөк күсеше эпохаһы"ның башы була, уның иң юғары нөктәһе б.э. IV-V быуаттарына тура килә. Гундар йоғонтоһо арҡаһында Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан, Көньяҡ Урал, Урта Азия далалары ҡәүемдәренең антропологик тибында монголоид элементтар, шулай уҡ төрки телдәр киң таралыу таба.




*Карта № 5. Беҙҙең эра сиктәрендә яҙма сығанаҡтар буйынса Көньяҡ Уралдың һәм уға йәнәш территорияларҙың этносәйәси картаһы*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# СИТ ИЛДӘН ТӘҮГЕ ФОТОАППАРАТ

**Бөгөнгө һүҙебеҙ 1936 йылдан алып 1950 йылға тиклем Германияның Штутгарт-Вангене ҡалаһында сығарылған Kodak Retina фотоаппараты хаҡында. Ул Башҡортостан Милли музейының "Металдар" фондында ОФ 33342/1, ГК 11630435 һаны аҫтында һаҡлана.**

Фотоаппарат көрән күн көп эсендә (12 см*7,5 см*3,5 см), үҙе бик ҙур ҙа түгел һәм еңел. 35 мм пленкалы был уңайлы фотоаппаратты уйлап табыусы - немец конструкторы Август Нагель.

Фотоаппарат менән эшләү ауыр түгел. Фотоаппараттың корпусы аҫтындағы махсус төймәгә баҫһаң, ҡапҡасы асыла һәм объектив килеп сыға. Объективтың һаҡлау ҡапҡасында "Kodak" тигән яҙыуы бар. Әлеге фотоаппаратта алыҫлыҡты үлсәгес һәм автомат рәүештә фокусҡа ҡуйыу мөмкинлектәре ҡаралмаған.

Фотоаппарат менән горизонталь һәм 90 градусҡа бороп, вертикаль рәүештә ҡулланыу уңайлы булһын өсөн объективтың өҫкө яғына һәм бер ҡабырғаһына арауыҡ менән диафрагма билдәләре ҡуйылған.

Фотоаппарат музейға 2018 йылда бүләк ителгән.




*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

Гвардия өлкән сержанты Ғәбделкәбир Ишбирҙин, 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадроны флангыһында позиция биләп, үҙе командалыҡ иткән взвод яугирҙары менән алышҡа әҙерләнә. Дошман автоматчиктары, үҙҙәренә янаған хәтәр хәүефте һис бер һиҙмәйенсә, уларға яҡынлашҡандан яҡынлаша бирә. Взвод командиры ут асырға бойора, немец һалдаттары, беҙҙең яугирҙар уты аҫтында һәләкәткә осрап, яу яланын ташлап ҡасырға мәжбүр ителә. Батыр башҡорт яугиры, Күгәрсен районының Мораҡ ауылы егете, III дәрәжәләге Богдан Хмельницкий ордены кавалеры Ғәбделкәбир Ишбирҙин 1944 йылдың 20 декабрендә фронтта һәлак була.

Шул уҡ 60-сы гв. атлы полкы яугиры Нур Кулиев, пулеметы менән алғараҡ сығып, ҡуйы үлән араһында урынлашып, атакаға күтәрелгән дошманды ҡаршы алырға әҙерләнә. Немец һалдаттары сылбырына йөҙ метр тирәһе арауыҡ ҡалғас, ул пулеметының гашеткаһына баҫа - атакаға барыусылар, үткер салғынан ҡырылған үлән кеүек, ергә йығыла, тере ҡалғандары артҡа табан ҡасып китеү яғын ҡарай. Ул шулай уҡ III дәрәжәләге Богдан Хмельницкий орденына лайыҡ була.

Гв. подполковнигы Таһир Күсимовтың 58-се гв. атлы полкы артиллеристары һәм ҡылыссы эскадрондары дошмандың бер туҡтауһыҙ алып барылған атакаларына батырҙарса ҡаршы тора. Кузьминки һәм Гончаров-Подел ауылдары янында немецтар, үҙҙәренең танкылары артына ышыҡланып, контратакаға күтәрелә. Әммә беҙҙең яугирҙарыбыҙ ҡаушап ҡалмай - дошман, яу яланында сафтан сығарылған 9 танкыһын, юлдарҙа тиҫтәнән ашыу автомашинаһын ҡалдырып, сигенергә мәжбүр була. Кузьминки ауылы янындағы урманда йөҙҙән ашыу немец һалдаты үлемен таба.

Корпус командиры гвардиясыларға яңы бурыс ҡуя - 14-се һәм 16-сы атлы дивизия яугирҙарына Завеленье, Малодуш, Смогорино ауылдарын дошмандан азат итергә һәм Коростень - Речица юлына сығырға бойороҡ бирелә.

Корпус частары 12 ноябрҙә, Надвин ауылы аша үтеп, Андреевка ауылы йүнәлешендә һөжүм башлай. 14-се гв. атлы дивизияһы Посека, Андреевка, Березовка ауылдары районына сыға, ә беҙҙең 16-сы гв. дивизияһы, дошман биләгән ауылдарҙы урап уҙа - бының өсөн һаҙлыҡлы урындарға бүрәнә түшәлә, артиллеристар орудиеларын немецтарҙың тылына алып сыға. Яугирҙар Романовка һәм Смогорино ауылдарына яҡынлаша. 13 ноябрҙә киҫкә табан 60-сы гв. атлы полкы Завеленье ауылына бәреп инеп, Речица - Коростень юлына сыға, дошмандың резервтар, ҡорал ташыу юлы киҫелә. 58-се гв. атлы полкы Романовка ауылын азат итә, Малодуш ауылының көнсығыш ҡырыйына бәреп инә. Әммә немецтар ҙа бында резерв көстәрен килтереп өлгөрә - алыш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара.

14 ноябрҙә немецтар контратакаға ташлана. 60-сы атлы полк атлыларына дошман Андреевка тарафынан һөжүм итһә, 58-се атлы полк немецтарҙың Малодуш төркөмөнә ҡаршы тора, ә 62-се полк уларҙың Осипов ауылы яғынан Малодушҡа ынтылған частарын тотҡарлай. Немец командованиеһы нисек итеп булһа ла Речица - Коростень шоссе юлына сыҡҡан яугирҙарыбыҙҙы сигенергә мәжбүр итергә теләй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Мортаза Рәхимов ярҙамы менән ете томлыҡ "Башҡортостан энциклопедияһы"н башҡортса сығарып ҡына ҡалманыҡ, өҫтәмә рәүештә "Народы Башкортостана", "Военная история башкир" баҫмаларын да сығарҙыҡ.*



# ДОНЪЯ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫНА...

**Быйыл "Башҡортостан энциклопедияһы" дәүләт автономиялы фән учреждениеһы барлыҡҡа килеүенә 30 йыл тулды. Был датаны республика энциклопедистары түңәрәк ҡор менән билдәләне. Сарала БР Фәндәр академияһы президенты, техник фәндәр кандидаты Камил Рамаҙанов, "Башҡортостан энциклопедияһы" директоры, социология фәндәре кандидаты Илгиз Солтанморатов, фән эшмәкәрҙәре ҡатнашты. Татарстан һәм Саха Республикалары энциклопедистары коллегаларына видеоҡотлауҙарын еткерҙе.**

БР Фәндәр академияһы президенты ***Камил Нурулла улы*** бөгөнгө фейктар мәғлүмәт һуғышы алып барған ваҡытта дөрөҫ мәғлүмәткә ихтыяж ҙур булыуын һәм бында иң дөрөҫ мәғлүмәт сығанағы булып энциклопедия тороуын, шулай уҡ быйыл дәүләт заданиеһының тамырынан үҙгәреп, заман талаптарына яуап биреүгә өлгәшеүен тәүбурыс итеп ҡуйыу зарурлығын билдәләне. Ил Президенты тарафынан алдағы 10 йылдың фәнгә бағышланыуын белдереп, тәрбиә, белемде популярлаштырыуҙың төп урында булырға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был йәһәттән "Башҡортостан энциклопедияһы" штатын арттырыу һәм көсәйтеү буйынса эш алып барыласағына өмөт уятты, сөнки бығаса ойошма Башҡортостан Фәндәр академияһының махсуслаштырылған учреждениеһы булып торһа, 1 марттан уның айырымланған бүлексәһе булып ҡушылды. Был ҡушылыуға Камил Рамаҙанов ҙур өмөттәр бағлаһа ла, эш хаҡтарын арттырыу, матди-техник базаны нығытыу буйынса вәғәҙәләр бирһә лә, энциклопедия хеҙмәткәрҙәре хафаланып ҡарай, сөнки ошо үҙгәртеп ҡороу ваҡытында "Башҡортостан энциклопедияһы" учреждениеһы бик ҙур зыян күрә - штаттағы 50 хеҙмәткәр урынына хәҙер 17 кеше ҡалдырыла. Әле штат берәмеген 39 кешегәсә арттырыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла (Татарстан энциклопедияһында - 70 кеше).

Ә ошо өс тиҫтә йыл арауығында "Башҡортостан энциклопедияһы" дәүләт автономиялы фән учреждениеһы энциклопедистика буйынса Рәсәйҙә лидер булып тора һәм юбилейын 38 томдан торған 26 атамалы баҫма энциклопедия, 8-е - электрон вариантта, 22 һүҙлек-белешмә баҫма сығарып, ҙур багаж менән ҡаршылай. Башҡортостанға, Рәсәй Федерацияһына ғына түгел, хатта халыҡ-ара аудиторияға дөрөҫ мәғлүмәт таратыу маҡсатында уға республиканың ике телдә сыҡҡан ете томлыҡ энциклопедияһы һәм башҡа энциклопедиялар индерелгән "Башҡортостан" төбәк интерактив энциклопедик порталы эшләй, мәғлүмәттең бер өлөшө инглиз телендә сыға. Уны ҡулланыусылар һаны йылдан-йыл арта бара. Порталда, баҫма киң мәғлүмәт сараларынан айырмалы, мәғлүмәт яңыртылып тора һәм уны заман талаптарына ярашлы камиллаштырыу ҙа мөһим бурыстарҙың береһе.

Йыйылыусылар проблема күтәреп кенә ҡалманы, үткәндәргә байҡау яһап, киләсәккә бурыстар ҙа билдәләне. Һүҙ - түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусыларға.

***Илгиз Солтанморатов, "Башҡортостан энциклопедияһы" дәүләт автономиялы фән учреждениеһы директоры:*** "Башҡортостан энциклопедияһы" учреждениеһы, башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, һәр саҡ алдынғы булды. Рәсәйҙә энциклопедистика критерийҙары буйынса төҙөлгән шәхес тураһында М. Лермонтовҡа бағышланған бер генә энциклопедия булһа, беҙ тап ошо критерийҙар буйынса эшләнгән "Салауат Юлаев" энциклопедияһы менән маҡтана алабыҙ. Шулай уҡ Мостай Кәрим энциклопедияһы әҙер, кәрәк булғанда, ай-ай ярым ваҡыт эсендә баҫтырып сығарыу мөмкинлегебеҙ бар.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғышҡан яугирҙар - шайморатовсылар буйынса икенсе баҫма донъя күрҙе, база даими тулыланып тора һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән икенсе вариантты ла яңыртыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. Тағы бер матур инициативабыҙ - интерактив порталдағы "Башҡортостандың билдәле кешеләре" сайты. Проект киләсәкте күҙаллап эшләнгән һәм тейешле күләм тупланһа, уны баҫтырып сығарырға ла мөмкин буласаҡ.

Элек беҙҙең энциклопедистарҙың конференцияһын уҙғарыу йолаһы була торғайны. Ғалимдар өсөн бындай форумдарҙың зарурилығын аңлатып торорға түгел. Улар башҡорт энциклопедистикаһын популярлаштырырға ярҙам итә. Киләһе йылға ла уны үткәреүҙе планға индерергә кәрәк, тип уйлайым. Шулай уҡ төбәк энциклопедистикаһы буйынса журнал, унан тыш, 7 йыйынтыҡ сыға ине. Был журнал Бөтә Рәсәй аудиторияһына иҫәпләнһә, "Вопросы энциклопедистики" журналы үҙ хеҙмәткәрҙәребеҙҙең ғилми тикшеренеүҙәрен, уй-фекерҙәрен баҫтырыу урыны булды. Шуға уны ла тергеҙергә кәрәк. Беҙгә шулай уҡ энциклопедистика өлкәһе буйынса махсуслашҡан фән кандидаттарын, фәнни публицистиканы энциклопедистикаға еткереп әҙерләгән белгестәр сығарырға кәрәк. Был йәһәттән методик ҡулланмалар бар, улар менән Рәсәй төбәктәре һәм күрше дәүләттәрҙән коллегалар киң ҡуллана.

Эшмәкәрлегебеҙҙең тағы бер йүнәлеше - барлыҡ темалар буйынса ла китаптар сығарыу. Был эстафетаны заманында популяр булған "Ғилем" нәшриәтенән ҡабул иттек. Заманында, "Ғилем" нәшриәте булғанда, йәш ғалимдарға үҙ эштәрен баҫтырып сығарыу мөмкинлеге бар ине. Был эште лә тергеҙергә, күләмде йылдан-йыл арттырырға кәрәк. Быйылға 16 монография баҫылыуҙы көтә лә инде.

## Урал тауҙарынан ҡараш



Пландарға килгәндә, башҡорттар тураһында тупланған мәғлүмәттәр энциклопедия сығарыуға етерлек, һүҙлек эшләнгән. БР Мәғариф министрлығы Бәшир Рәмиев тураһында китап сығарыу менән ҡыҙыҡһына, БР Хөкүмәте тарафынан Кәрим Хәкимов энциклопедияһын эшләү тураһында һүҙ күтәрелде. Театраль энциклопедия буйынса әҙерлектең беренсе этабы үтелгән, һүҙлек, концепция - барыһы ла әҙер.

***Уйылдан Сәйетов, ғилми консультант, философия фәндәре кандидаты:*** Күп томлы "Башҡортостан энциклопедияһы"н сығарыу тураһында 1991 йылдың 19 мартында ҡабул ителгән Хөкүмәт ҡарары хәл иткес роль уйнаны. Ул ваҡытта был ҡарарҙы үтәү мөмкин түгел икәнен белһәк тә, барыһы ла эйфория кисерә ине һәм күпте өмөт итте, күп эшләне. Ҡарарҙа яҙылғанса, "Башҡортостан энциклопедияһы" 8 томдан торорға һәм башҡорт, рус телдәрендә булырға, 16 томы 1994 - 2000 йылдарҙа Башҡортостан Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ойошторолған төркөм (төркөм етәксеһе - Рәшит Шәкүр) көсө менән донъя күрергә тейеш, тип күҙалланды. Финанслау бағыусылар иҫәбенән тип фаразлана һәм 1991 йылға ғына 5 миллион 200 мең һум аҡса йыйыу билдәләнә. Әммә бер йылда ни бары 868 мең һум ғына йыйыла.

Мин 1992 йылдың февралендә энциклопедистар төркөмөнә ҡушылдым һәм әҙерлек барышында шул мәғлүм булды - был ғына көс менән шундай ҙур эште атҡарып сығыу мөмкин түгел. Шуға тәкдим менән Хөкүмәткә сыҡтыҡ. Улар беҙҙе тәнҡитләй, бүлекте тарҡата ала ине, әммә был аҙымға барманы, киреһенсә, 1993 йылда айырым дәүләт учреждениеһы төҙөү мөмкинлеге бирҙе (беренсе мөхәррир - З. Ураҡсин, беренсе урынбаҫар - У. Сәйетов).

Был дөрөҫ юл булды, әммә Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендә уны бик аҙҙар һайланы. 1994 йылда Татарстан Республикаһы айырым ойошма - Татар энциклопедияһы институтын булдырҙы. Нигеҙҙә, милли республикаларҙа эш яҡшы ойошторолдо, әммә улар 3-5 энциклопедия (Башҡортостан энциклопедияһы күрһәткестәренән 10 тапҡырға әҙ) сығарыу менән генә сикләнде.

Рәсәйҙә Башҡортостан алға сыҡты һәм һәр саҡ лидер булды. Ә лидер булыу - ул маҡтаулы ғына түгел, яуаплы ла бурыс, кимәлде тотоуы бик ауыр. Энциклопедистика үҫеште. Күп томлы энциклопедияны башҡортса сығарырға булғас, проблемалар башланды ла инде. Республиканың ул ваҡыттағы етәксеһе уны электрон рәүештә генә сығарырға ҡушты. Ул заманда ауылдарҙа интернет юҡ, "Башҡортостан энциклопедияһы" электрон варианта төпкөл ауылдарға барып етә алмай ине. Беҙ ярҙам һорап, Мортаза Рәхимовҡа мөрәжәғәт итергә мәжбүр булдыҡ. Уның ярҙамы менән финанс проблемаларын хәл иттек, ете томлыҡ "Башҡортостан энциклопедияһы"н башҡортса сығарып ҡына ҡалманыҡ, өҫтәмә рәүештә "Народы Башкортостана", "Военная история башкир" баҫмаларын да сығарҙыҡ.

Республикаға яңы власть килгәнсе беҙгә теймәнеләр ҙә, әммә өҫтәмә аҡса ла бирмәнеләр, бары тик эш хаҡына һәм бинаны тотоуға ғына аҡса бүленде. Ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәндә, энциклопедияны тота алмаһағыҙ - ябылығыҙ, тип кенә ҡуйҙылар. Власть алмашынғас, бер ни тиклем өмөт барлыҡҡа килде. Хөкүмәттә беҙҙе тыңланылар, эш ҡуша башланылар. Мәҫәлән, Оло-Тәләк фажиғәһенә бағышланған китап сығарҙыҡ, халыҡ иҫәбен алыу алдынан 20 район энциклопедияһын сығарырға ҡушылды, әммә төньяҡ-көнбайыш төбәк буйынса 5 китап сығарырға ғына өлгөрҙөк, йыл ярым ваҡыт эсендә 7 китап сыҡты.

Хәҙер, Фәндәр академияһына ҡушылғас, яҡын киләсәктә донъя күрәсәк энциклопедик баҫмаларҙы сығарыу планын раҫлатыуға һәм финансланыуына өлгәшергә кәрәк. Әлегәсә баҫмаларҙы планлаштырыу һәм финанс йәһәтенән тәьмин итеү мәсьәләһе юлға һалынмаған. Беҙҙең төрлө йүнәлештәр буйынса 30 һәм унан да күберәк йылға иҫәпләнгән энциклопедик баҫмалар сығарыу планы бар, ул Фәндәр академияһында ла, Хөкүмәттә лә раҫланған, әммә финанс яғынан тәьмин ителмәгән. Шулай уҡ ғалимдарҙың ярҙамына өмөт итәбеҙ. Ғилми консультанттар советын һуңғы ваҡытта йыйғаныбыҙ юҡ. Улар яңы энциклопедик баҫмалар өҫтөндә генә түгел, интерактив портал материалдарын актуалләштереү буйынса ла эшләргә тейеш.

***Рәшит Шәкүр, филология фәндәре докторы:*** 1997 йылдың 2 декабрендә Фән буйынса дәүләт комитеты коллегияһының ҡарары сыҡты, унда күп томлы "Башҡортостан энциклопедияһы"н әҙерләү тураһында яҙылған. Ошо ҡарарҙы тормошҡа ашырып, баҫманың концепцияһы әҙерләнде, барлыҡ белем тармаҡтары буйынса һүҙлектәр төҙөлдө, ғилми-редакция советына тапшырылып, раҫланды. Был ниндәй һүҙлек ине: әлегә тик-

✓ *Беҙгә: "Кем ул Иҙелғужин? Ғүмере буйына уның бер генә китабы донъя күргән бит", - тип әйтеүселәр ҙә булды. Әммә беҙҙе был туҡтатманы, эҙләнеүҙәр осоронда уның 5 китабын һәм бик күп мәҡәләләрен таптыҡ.*



лем сығарылған энциклопедиянан айырмалы, уға Башҡортостан һәм бөтә донъя тураһында мәғлүмәт инергә тейеш ине, йәғни донъя энциклопедияһы. Ҡаҙағстанда, Украинала, Беларуста һ.б. шундай энциклопедиялар сығарып өлгөрҙөләр.

Шуға бәйле, минә Башҡортостандың донъя энциклопедияһы нимәне күҙаллай, тигән һорау бирҙеләр. Мин: "Ул Урал тауҙары күҙлегенән донъяға ҡараш", - тинем. Йәғни ҡайҙалыр Мәскәүҙә, Лондонда йәки Парижда түгел, ә Өфөлә сығарылған энциклопедия. Уның концепцияһын, принциптарын "Истоки духовности" тигән китабымда яҙғанмын. Бөгөн беҙҙең алда энциклопедистиканы үҫтереү бурысы тора һәм әгәр Башҡортостан үҙен донъя энциклопедияһы менән танытһа, башҡа мөстәҡил дәүләттәр араһында урынын тағы бер ҡат раҫлар ине.

***Розалия Солтангәрәева, филология фәндәре докторы:*** Халыҡты уның идеологияһы билдәләй, идеологияһы буйынса уның хаҡында фекер йөрөтәләр. Ә халыҡ идеологияһы эпоста тупланған.

**Үҙенең эпосы булған халыҡтар күп түгел, элек-электән үҙ ерҙәрендә йәшәгән сахалар, алтайҙар, башҡорттар, ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар. Шуға күрә беҙгә, башҡорттарға, "Урал батыр" эпосы буйынса энциклопедия эшләргә кәрәк. Уға бер генә эпосты түгел, ә эпостар циклын индерергә мөмкин. Был эште бөгөн атҡарып сығыу бик мөһим, сөнки хәүефле хәл килеп тыуҙы - бер ниндәй нигеҙһеҙ, дәлилһеҙ башҡорт эпостарын үҙҙәренеке тип белдереп, уға хужа булыу, беҙҙең милли мираҫыбыҙҙы урлау көсәтелә.**

Тарихта эпос буйынса энциклопедия эшләү миҫалы булып "Калевала" энциклопедияһы тора. Әгәр эпостың энциклопедияһы булһа, ул халыҡ мәңге йәшәй, ул халыҡтың, тәү сиратта, аҫаба халыҡтың абруйын күтәрә.

Шулай уҡ "Башҡорт халыҡ ижады" серияһына ингән һәр райондың фольклорын ошо энциклопедияға индергәндә ул халыҡтың рухи статусын һәм башҡорт мәҙәниәте кодының абруйын күтәрер ине. "Башҡортостан халыҡтары фольклоры" бар тиерҙәр, әммә унда мәғлүмәт дөйөмләштереп бирелгән, иғтибар ян-яҡҡа тарала. Энциклопедияның тейелгеһеҙлеге мәсьәләһенә килгәндә, бер генә халыҡ та уға ингән мәғлүмәтте үҙгәртә, үҙенеке итеп күрһәтә алмаһын. Бының буйынса юристар тәркөмә эшләргә тейеш.

***Фәнил Фәйзуллин, философия фәндәре докторы:*** Беҙгә һәр даим "Башҡортостан энциклопедияһы"ның башҡорт халҡының һәм республиканың төп, фундаменталь китабы икәнен ҡабатлап торорға кәрәк. Шулай уҡ башҡорттарҙың Рәсәйҙә федератив ҡоролошҡа, шул иҫәптән илдә мөстәҡил берәмектәрҙең мөмкинлеген киңәйтеү проблемаларына яңыса ҡараш зарурлығы инициативаһы менән сығыш яһаусы халыҡ булғанын да онотоорға ярамай. Бына ошо ике мәлде һәр саҡ билдәләргә кәрәк.

**Республикала энциклопедияларҙың күп булыуы яҡшы, әммә тағы ла етди аҙым яһарға һәм башҡорт халҡы тарихына арналған энциклопедия эшләргә кәрәк, сөнки бөгөн республикала ғына түгел, башҡа субъекттарҙа ла тарихыбыҙҙы боҙоп күрһәтергә тырышыусылар бик күп.**

Беҙҙең бай тарихыбыҙ, энциклопедия булдырыу өсөн етди ғилми нигеҙебеҙ - 8 томлы "Башҡорт халыҡ тарихы" китабы бар.

***Клара Әғлиуллина, "Энциклопедистика һәм территорияларҙы комплекслы өйрәнеү үҙәге" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры:*** Информатизация буйынса дәүләт комитетына "Башҡортостан" төбәк энциклопедик интерактив порталын һәм БР Фәндәр академияһы порталын БР мәғлүмәт системалары исемлегенә индереү тәҡдиме менән сығырға кәрәк. Энциклопедик портал, республика буйынса фәнни мәғлүмәт агрегаторы булараҡ, унда булырға хоҡуҡлы. Һәм оло коллегаларыма, йәштәргә алып килегеҙ, уларға үҙ тәжрибәгеҙҙе өйрәтегеҙ, тип мөрәжәғәт итер инем. Был донъяла бар нәмә лә һатылмай һәм һатып алынмай, остаздарҙың тәжрибәһен туплау, үҙләштереү ҙә шундай ҡиммәттәргә инә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Түңәрәк ҡор"ҙа төплө һәм етди һөйләшеү булды. Сығыш яһаусылар шулай уҡ республиканың ҡаҙылма байлыҡтары тураһында мәғлүмәт туплаған "Тау энциклопедияһы"н, Мифтахетдин Аҡмулла менән Шәйехзада Бабич, Рәсәй дәүләтенең федератив ҡоролошона нигеҙ һалыусы Ҡәнзәфәр-бей, уның артабанғы үҫешен тәьмин иткән Әхмәтзәки Вәлиди, федераль ҡоролошто камиллаштырған Мортаза Рәхимовҡа арналған энциклопедиялар булдырыуҙы тәҡдим итте. Үҫеп килеүсе быуынды күҙ уңында тотоп, "Балалар энциклопедияһы", "Башҡортостан спорты энциклопедияһы" зарурлығы тураһында ла фекерҙәр яңғыраны. Башҡортостанда Апимондия үтергә тейеш булғас, "Башҡорт балы" энциклопедияһын сығарыу тураһында һүҙ ҡуҙғатылғайны, әммә ул да ваҡыт саңы аҫтында ҡүмелеп ҡалды. Шулай уҡ "Башҡорт аты" энциклопедияны булғанда ла зыян булмаç ине... "Түңәрәк ҡор" асыҡлауынса, кәрәк нәмәләр бик күп, әммә бәләкәй генә коллектив менән һәм финанс ярҙамы булмай тороп, уларҙы хәл итеп булырмы? Киләсәк быуындарға беҙгә тиклем һаҡланып килеп еткән атай-олатайҙар мираҫын түкмәй-сәсмәй, урлатмай тапшыра алырбыҙмы?**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА яҙып алды.**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ШӘХЕСТӘРЕБЕҘҘЕҢ...

## рухи-ғилми мираҫы өйрәнелә



**Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты рухи мираҫты тергеҙеү һәм халыҡҡа еткереү буйынса ҙур эштәр алып бара. "Башҡорт республикаһын төҙөү башында торған дәүләт эшмәкәрҙәренең ғилми мираҫы" китабының 1-се томы - бына шуның асыҡ бер үрнәге. Унда мәғрифәтте үҫтереү йәһәтенән фиҙаҡәрлек ҡылған ғалимдарыбыҙҙың хеҙмәттәренә баһа бирелә. Баҫманың яуаплы мөхәррире - тарих фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Зөһрә Рәмил ҡыҙы Сабироваға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**Зөһрә Рәмил ҡыҙы, һеҙ "Башҡорт республикаһын ойоштороуҙа ҡатнашҡан дәүләт эшмәкәрҙәренең ғилми мираҫы" проекты авторҙарының береһе. Был проект нисек барлыҡҡа килде? Үҙ алдығыҙға ниндәй маҡсаттар һәм бурыстар ҡуйҙығыҙ?**

- Элек ғилми әҙәбиәтте уҡыған саҡта уларҙың авторҙарының Йомағолов, Иҙелғужин, Мирасов кеүек шәхестәрҙең хеҙмәттәренә һылтанмаларын күрһәм, һәр ваҡыт шуларҙың төп нөсхәһен уҡырға теләк тыуа ине. Тарих фәндәре кандидаты, уҡытыусы-ғалим, хәҙер инде мәрхүм Нил Урал улы Ишемғолов беҙ студент саҡта төп нөсхәләрҙең тик иҫке төркисә яҙылыуы, һаман уларҙың транслитерация кисереп, рус теленә тәржемә ителмәүе һәм бигерәк тә баҫылмауы хаҡында әсенеп һөйләй торғайны. Совет осоронда ғалимдар өсөн был хәл ителмәгән ҙур мәсьәлә булып ҡалды. Етмәһә, совет осоро идеологияһы ғәрәп менән латин графикаһында башҡарылған башҡорт зыялыларының, ғалимдарының хеҙмәттәре күптән иҫкереүе, ғилми яҡтан бөтөнләй ҡиммәттәре булмауы хаҡында фекер тыуҙырғайны. Бәлки, шуғалыр ҙа, республикала тарих фәнендә элекке ҡулъяҙма, баҫма хеҙмәттәргә иғтибар юҡ кимәлендә булды. Хәҙер беҙ, ниһайәт, фундаменталь тикшеренеүҙәр сығарыу эшенә тотондоҡ. Һәм һөҙөмтә булараҡ, Башҡортостан Республикаһының барлыҡҡа килеү осорона бағышланған "Башҡорт республикаһын ойоштороуҙа ҡатнашҡан дәүләт эшмәкәрҙәренең ғилми мираҫы" тигән беренсе томыбыҙ сыҡты.

**Ул осор шәхестәребеҙҙең эшмәкәрлеге, ысынлап та, аҙ өйрәнелгән. Ни өсөн һеҙ үҙегеҙҙең тикшеренеү өлкәһе итеп тап Кәрим Иҙелғужинды, Шәриф Манатовты һайланығыҙ?**

- Быға Иҙелғужиндың эштәре этәргес булды, тип әйтә алам. Хеҙмәттәшем, ғәрәп графика белгесе Ғ.Х. Абдрафиҡова менән уның мәҡәләһен тәржемә итеп ҡараныҡ, "Башҡорт аймағы" журналында баҫылып сыҡҡан "Башҡорт автономияһын ойоштороу һәм совет яғына сығыу көндәре" тигән мәҡәлә ине ул. Һуңынан инде китабына күстек. Кәрим Иҙелғужиндың хеҙмәте "Башҡорт хәрәкәттәре. 1917-1918-1919 йй." тип атала. Беҙгә: "Кем ул Иҙелғужин? Ғүмере буйына уның бер генә китабы донъя күргән бит", - тип әйтеүселәр ҙә булды. Әммә беҙҙе был туҡтатманы, эҙләнеүҙәр осоронда уның 5 китабын һәм бик күп мәҡәләләрен таптыҡ. Башҡа күренекле шәхестәрҙең хеҙмәттәре менән дә шулай булды. Йәштәргә әйткем килә: кем эҙләй, шул таба! Мәҫәлән, Шәриф Манатовтың сит телдәрҙә генә түгел, хатта сит илдәрҙә лә күпләп мәҡәләләре донъя күреүе хаҡында кем белә лә, кем ишеткән? Уның Ленинградта Көнсығыш хеҙмәтсәндәренең коммунистик университетында сит телдәр уҡытҡаны ла әлегә тиклем бик үк билдәле түгел ине. Уның сит илдәге тормошо һәм эшмәкәрлеге асылмаған, тиерлек.

Бындай эшмәкәрҙәр хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уларҙың сит телдәрҙән тыш, башҡорт телендә сыҡҡан эштәрен латин графикаһында ла уҡыйбыҙ. Был ҡыҫҡа осорҙа беҙҙең республика һәм ҡайһы бер башҡа республикалар латин алфавитын файҙаланып, ҡыҙыҡлы мәҡәләләр баҫтырып сығарған. Әйтергә кәрәк, бындай ҡулъяҙмалар һәм баҫма материалдар хәҙергә көндә енел уҡыла. Сөнки һәр беребеҙгә латин алфавиты таныш. Һуңынан, тотош быуын латин графикаһында уҡып өлгөрҙө бит. Улар латиницаны үҙ-ара хатлашыуҙа ҡуллана. Беҙ быны фронттан хаттарҙа, билдәле шәхестәрҙең үҙ-ара яҙылған хаттарында, ғаилә архивтарында күрәбеҙ. Бындай яҙма ҡомартҡылар ҡатламын да урап үтеү мөмкин булмауы ла асыҡланды. Был да бит - беҙҙең мәҙәниәтебеҙ, тарихыбыҙ һәм үҙенсәлегебеҙ.

**Текст өҫтөндә нисек эшләйһегеҙ?**

- Ике телде белгән ҡайһы берәүҙәргә бындай текстарҙы тәржемә итеү бик анһат күренеүе лә ихтимал. Бары тик археограф белгестәре генә тексты тәржемә итеү өсөн диалектизмдарҙы, архаизмдарҙы, шул ваҡыттағы сәйәси, социаль, иҡтисади терминологияны белеү һәм уларға заманса тап килгән һүҙҙәрҙе һайлай белеү кәрәклеген яҡшы аңлай. Мәҫәлән, Кәрим Иҙелғужин һәм Сағит Мирасов бер нисә абзацҡа һыйырлыҡ бик ҙур һөйләмдәр менән яҙғандар, улар бөгөнгө грамматикаға, лексикаға тура килеп бөтмәй. Һөйләм төҙөлөшөнөң бик ҡатмарлы һәм ҡатлы-ҡатлы булыуы уны аңлауҙа ауырлыҡтар тыуҙыра, әммә ошо һәм башҡа ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығып, авторҙың нимә әйтергә теләгәнен бөгөнгө уҡыусыға аңлайышлы итеп еткерергә кәрәк ине. Беҙ ошо бурысты атҡарҙыҡ, тип әйтә алам.

Тарихсылар хаҡында тарихты "яңынан яҙалар" тигәнде йыш ишетергә мөмкин. Әммә был төптән улай түгел. Беҙ уны ҡабаттан яҙмайбыҙ, ә тулыландырабыҙ. Эйе, тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә ҡыҙыҡлы факттар асыла, улар уҙған йылдарҙағы ваҡиғаларға бөтөнләй башҡаса ҡарарға мөмкинлек бирә, күп кенә әйберҙәргә мөнәсәбәт тә үҙгәрә, асыштар яһала. Һәм былар барыһы ла яҡшыға ғына. Мәҫәлән, илебеҙ тарихында ҡанлы эҙ ҡалдырған репрессия йылдары бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Тарихыбыҙҙағы был ҡанлы биттәр әле булһа асылып етмәгән. Оло быуын вәкилдәре шул фажиғәле көндәрҙе иҫләһә лә хәҙер ҙә асылып китеп һөйләргә әҙер түгел. Был мәсьәләләрҙе ғалимдарҙан башҡа кемдәргә күтәрергә һуң? Беҙҙең эшмәкәрлек урамдағы ике яҡлы хәрәкәтте хәтерләтә. Беҙ үҙебеҙҙең проект сиктәрендә кешеләргә шанлы тарихты, шәхестәребеҙ ҡалдырған рухи-ғилми мираҫты иҫкә төшөрөргә, тәрәнерәк аңларға ярҙам итәбеҙ, һәм улар рәхмәт йөҙөнән беҙгә ҡулъяҙмалар килтерә, ә был инде, үҙ сиратында, алып барған эшебеҙҙе яңы мәғлүмәттәр менән тулыландырырға ярҙам итә.

**Мәғрифәтселек үҫешенә ныҡлы нигеҙ һалған шәхестәребеҙҙең хеҙмәттәре, һис шикһеҙ, милләттәштәре күңелендә ғорурлыҡ тойғоһо ғына уята. Хәҙер һеҙҙе ниндәй исемдәр ҡыҙыҡһындыра?**

- Әйтеүемсә, күренекле эшмәкәрҙәребеҙҙең ғәрәп һәм латиницала яҙылған хеҙмәттәре бик күп. Был теманы яҡтыртыуҙы дауам итәбеҙ. Былтыр беҙ Башҡортостан Республикаһының Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондынан грант откайныҡ. Институтҡа ошо эштә яңы ҡатнашыусылар, белгестәр килде. Яңы проект "Ҡайтарылған исемдәр" тип атала. Унда Абдулғәзиз Дәүләтшин, Муллайән Халиҡов, Вәлирахман Ғәбитов, Камал Айҙаров, Хәлим Әмиров һәм башҡа эшмәкәрҙәрҙең хеҙмәттәрен күрһәтергә теләйбеҙ.

Әлегә бөтә серҙәрҙе лә асыу кәрәкмәç. Әммә гәзит уҡыусыларҙы ла хеҙмәттәшлеккә саҡырабыҙ. Үҙегеҙ нимә баҫтырырға теләйһегеҙ, нимә менән уртаҡлаша алаһығыҙ, туғандарығыҙҙың латин һәм ғәрәп графикаһында ниндәй хеҙмәттәре, хаттары, мәҡәләләре һаҡлана, зинһар, шылтыратығыҙ, килегеҙ, һөйләгеҙ. Эште бергә дауам итербеҙ. Һәм беҙҙең хеҙмәттәрҙе уҡығыҙ, танышып барығыҙ!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА яҙып алды.**

✓ ***Йөҙә белмәгән малайҙар иһә яр буйында ғына сыптырҙаша. Уларҙың ҡайһылары йотомос тоторға маташа. Әгәр тоттомо усындағы һыу менән ҡуша йотоп та ебәрә. Йәнәһе, тере балыҡ йотҡас, үҙе лә йылғыр бәрҙеләй йөҙөп китә.***





Ноғман МУСИН

# АТАЙЫМДЫҢ ОС ҺӘНӘГЕ

Хикәйә

Их, уйындарҙың күплеге! Уларҙың һәр ҡайһыһын берәр тапҡыр ғына уйнаһаң да, көн оҙонона етерлек. Хатта бер нисәһе ҡараңғы төшөүгә лә ҡала әле. Беҙ, малайҙар, уларҙың бөтәһенә лә өлгөрөргә тырышабыҙ. Алдан һис ниндәй һөйләшеү булмаһа ла, иртәнге тамаҡты туйҙырыу менән, ғәҙәттә, Ғимран бабайҙарҙың өйө эргәһенә йыйылабыҙ. Нисә шулай өйрәнгәнбеҙҙер. Ғимран бабайҙың беҙҙең менән уйнарҙай бала-сағаһы ла юҡ бит инде. Ә иртәнсәк һайын малайҙар уның нигеҙе бейек итеп таштан буралған өйө эргәһенә һис ниндәй сақырыуһыҙ берәм-һәрәм килә башлай. Йәйге йомарт ҡояш нурҙары апаруҡ йылытырға өлгөргән таш нигеҙгә арҡаны терәп, кисәге уйындарҙа кемдең еңеүе, кемдең еңелеүе, кемдең сосораҡ булыуы, кемдең харамлашыуы хаҡында бәхәсләшеүгә байтаҡ ваҡыт китә. Ҡайһы саҡта ошондай бәхәс ялғашыуға барып олғаша. Бындай мәлдә инде эргәбеҙҙә көтмәгәндә Ғимран бабайҙың сауығып бөткән кәүҙәһе пәйҙә була. Әйтерһең, ул тәҙрәнән беҙҙең һөйләшкәнгә ҡолаҡ һалып, һәр хәрәкәтебеҙҙе күҙәтеп ултырған. Ул, ҡапҡаһынан сыҡҡас, ҡарт кәзә йүткергәндәге шикеллерәк итеп, тамағын ҡыра-ҡыра беҙгә табан йүнәлә. Эргәбеҙгә килеп еткәс, алға кәксәйгән һаҡалын таяғы башына терәп, аҙ ғына һүҙһеҙ тора. Шунан ҡапыл сыйылдыҡ тауыш менән ҡысҡырып ебәрә:

- Атағыҙҙың малы уртаҡмы ни? Туҡтағыҙ әле!

Тызрайышып бер-берећенең яғаһына йәбешкән, күҙҙәре аларған, аһылдашҡан малайҙарҙың гәйрәте ҡапыл ҡайта, икеһе ике яҡҡа атлай. Ғимран бабай кеткелдәп көлә, төпкә батҡан сағыр күҙҙәрен алмаштилмәш беҙгә йөрөтөп сыға.

- Ай, сәбәке малайҙар, татыу ғына уйнаһағыҙ, ни була? Улай тауыш ҡубарһағыҙ, яҡын да юлатмам.

Беҙҙең, әлбиттә, өйрәнгән урындан китке килмәй.

- Ғимран бабай, ҡабат улай итмәбеҙ.

- Улар юрый ғына тартҡылашты бит...

- Бер тауышыбыҙ сыҡмаç, - тип бабайға мөлдөрәп ҡарайбыҙ.

Ғимран бабай аҙ ғына уйланып торғандай итә: йәнәһе, беҙҙе бында ҡалдырырғамы-юҡмы, шуны хәл ҡыла. Ахырҙа, үҙ хөкөмөн әйтә.

- Ярай, тик мәтри, уландар, берегеҙ бер талашһа...

Талашһаҡ, ул ни эшләтмәксе, асығын ғына әйтмәй, ҡапҡаһы яғына ынғайлай; ләкин уның беҙгә яманлыҡ эшләмәçен беләбеҙ. Уйнағаныбыҙҙы ҡарарға ярата бит ул. Хатта ҡайһы саҡта әбейе менән икәүләшеп ҡапҡа төбөнә сығып ултыралар.

Шулай ҙа Ғимран бабайҙың киҫәтеүе беҙҙең эште көйләп ебәрә. Эште сүрәкәй уйнауҙан башлап алып китәбеҙ. Тәнде яҙыу, сәм ҡуҙғатып алып китеү өсөн һәләк йәтеш уйын ул. Артыҡ күп тә йүгермәйһең, ләкин ситкә һуғылған сүрәкәй таяғын бәләкәй генә һыҙыҡҡа төшөрөү өсөн бик ҙур таһыллыҡ, сама белеү кәрәк. Тән ҡыҙып алғас, ике төркөмгә бүленеп, бура һуғыуға тотонабыҙ. Буралар ҙа, һәр кемдең үҙ исем-фамилияһының баш хәрефтәре яҙылған таяҡтар ҙа Ғимран бабайҙың ихатаһында - ҡойма буйында ғына һаҡлана.

Бура һуғыу - беҙҙең иң яратҡан, иң сәмләнеп тотона торған уйыныбыҙ. Көс тә, мәргәнлек тә, таһыл да кәрәк бында. Иң шәп бурасылар хатта арғы ос малайҙары менән ярышҡа ла сыға. Бура һуғыу беләктәрҙе талдыра, тирләүҙән күлдәктәр арҡаға лыпын йәбешә. Шуға күрә арабыҙҙан кем дә булһа:

- Малайҙар, әйҙәгеҙ, һыҙыҡ туп уйнайбыҙ, - тип бура һуғыу ялҡыта башлауын белдерә.

Уға ҡаршы килмәйҙәр, сөнки бөтәбеҙгә лә талғынырак, тәнгә ял бирерҙәйерәк уйын кәрәк. Һыҙыҡ туп бик сос, йылғыр булыуҙы, тупты мәргән бәреүҙе талап итһә лә, артыҡ ҡабаланмай уйнай торған уйын. Ләкин беҙҙең тир ҡатмай, төшлөккә етеп килгән ҡояш хәлебеҙҙе ала, әлһерәтә.

- Әйҙәгеҙ, малайҙар, һыу инергә!

Әйтерһең, һәр кем ошо һүҙҙәрҙе генә көтөп торған. Шаулашып, берҙәм күтәреп алалар:

- Ҡайҙа барабыҙ?

- Күкъятыуға.

- Юҡ, унда әле һыу һалҡындыр. Мотайға китәйек.

- Алыҫ бит ул...

Бынһын малайҙар ҡолаҡтарына ла элмәй. Ярты сәҡрым ер беҙҙең өсөн ҡайҙан алыҫ булһын? Бер-беребеҙҙе баҫтырышып, шаяра-шаяра Мотайға йүнәләбеҙ. Мотай - беҙҙең Ҡыҙылташ йылғаһындағы иң матур ятыу ул, белә-белһәгеҙ. Төбөнә йөморо, шыма беләү таштар түшәлгәнлектән, ул күпме кеше һыу инһә лә һис ҡасан буйрамай, ағымы ла ҡаты түгел, өҫкә ҡарай ҙа, арҡырыбуйға ла рәхәтләнеп йөҙөп йөрөйһең. Ятыуҙың тирә-яғы иһә муйыл, ерек әрәмәлеге менән уратып алынған. Уң яҡтағы һөҙәк ярында ғына кескәй аҡлан бар. Беҙ шунда унан-бынан сисенәбеҙ ҙә шым ғына күгәреп ятҡан ятыуға сумабыҙ. Тирләгән, саң ҡунған тән буйлап ғәләмәт бер рәхәтлек йүгерә, күҙ алдары яҡтырып киткәндәй була. Минең кеүек бәләкәйерәк малайҙар ятыу уртаһына уҡ йөҙөргә батырсылыҡ итмәй, һыу муйынға етер тирәгәсә белер-белмәҫ көйө атынып, ауыҙға тулған һыуҙы бөркә-бөркә йөҙөп хитланабыҙ ҙа туҡтап ҡалабыҙ. Һыу төбөнә баҫыу менән ятыуҙа ҡымйып йөрөгән сабаҡтар, ҡоморойҙар морондары менән төрткөләп, аяҡты ҡытыҡлай башлай. Беҙ тағы ла сумабыҙ, йөҙөп аҙапланабыҙ. Бөтөнләй йөҙә белмәгән малайҙар иһә яр буйында ғына сыптырҙаша. Уларҙың ҡайһылары усы менән һөҙөп ваҡ ҡына балыҡ селбәрәләре - йотомос тоторға маташа. Әгәр тоттомо, ҡыуанып, усындағы һыу менән ҡуша йотоп та ебәрә. Йәнәһе, тере балыҡ йотҡас, үҙе лә хәҙер үк йылғыр бәрҙеләй йөҙөп китә. Ләкин файҙаһы теймәй, күрәһең. Һаман яр буйындағы һай ергә ятып, ҡулдары менән һыу төбөнә таянып, аяҡтарын сәпелдәтеүҙән ары китә алмайҙар.

Ирендәр күгәреп, тәнгә бәпкә йөндәре ҡалҡҡансы ҡыялғандан аҙаҡ ҡына һыуҙан сығабыҙ. Яр башына ятып ҡыҙынабыҙ, һыңар аяҡта һикерәндәп йә таш саҡылдатып, ҡолаҡтарға тулған һыуҙы "түгәбеҙ". Тығын менән ҡаплап ҡуйылған һымаҡ тойолған ҡолаҡ эсенән йылымысланған һыу ҡымырйытып ҡына ағып төштөмө, әй рәхәт булып ҡала, бөтә башың еңеләйеп киткәндәй була.

Шунан беҙ, хәҙер инде ҡабаланмай ғына атлап, ауылға ҡарай йүнәләбеҙ. Ҡайтып, ашап сыҡҡас, ниндәй уйын башлау тураһында һүҙ ҡуҙғала. Төшкә тиклем уйнап өлгөрмәгән уйындар байтаҡ әле: соҡор туп, көтөү бураһы, элгес, сәкән, һәпәләк, йәшенмәк һәм тағы ла әллә ниндәй уйындар. Бәхәсләшә торғас, уйынды сәкәндән дауам итергә һүҙ ҡуйышабыҙ. Иң ҡыҙыҡ уйын ул сәкән. Беҙ уны икенсе төрлө лә - ҡала алыҫ, тип тә атап йөрөтәбеҙ. Былай атауҙың үҙ мәғәнәһе бар. Беҙ ике командаға бүленәбеҙ. Ошонан аҙаҡ һәр яҡтың үҙ ҡалаһы билдәләнә. "Кала" тигәнебеҙ - урамдың арғы һәм бирге остарындағы берәй өй була инде. Команда башлыҡтары:

- Минең ҡала - Миһран ҡарттар өйө.

- Ә минеке - Заһит бабайҙарҙыҡы, - тип белдергәс, уйын башланып китә.

Командалар, егерме-утыҙ метр ара ҡалдырып, ҡара-ҡаршы баҫа. Ҡулдарҙа - ҡайындан эшләнгән, башы кәксәйеп торған сәкәндәр, уйынды башлап ебәрәсәк командаңың башлығы алдында - шулай уҡ ҡайын ороһонан эшләнгән, күп һуғыуҙан шымарып бөткән ҡуш йоҙроҡ ҙурлыҡ туп. Сырайҙар, ҡараштар етдиләнә, бөтәбеҙҙең күҙ - шул туптa ғына. Унан китә кеүек үк зыҡ ҡубып, сәкән һуғырға тотоналар. Өлкәндәрҙең ярһып, шаулашып, беҙҙең кеүек үк харамлаша-талаша уйнағандарын ҡарап тороу үҙе бер мәрәкә.

Бына шулай үтә ине беҙҙең көндәр. Тик беҙ былар көн буйына туҡтауһыҙ уйнап ҡына йөрөгән икән тип уйлай күрмәгеҙ тағы. Беҙҙе уйнап йөрөгән еребеҙҙән әсәйебеҙ йә атайыбыҙ саҡырып ҡайтара ла тегебыл йомош ҡуша: ваҡыты-ваҡыты менән ҡайһы берҙәребеҙгә картуф баҡсаһына ингән кәзәләрҙе ҡыуып сығарырға, тауҙан быҙау ҡарап алып ҡайтырға, эркет ҡайнатыу өсөн аласыҡҡа күп итеп утын ташырға йә сәңгелдәктәге туғаның бәүетеп ултырырға тура килә. Ләкин беҙ барыбер уйнарға ла, өй йомоштарын үтәргә лә өлгөрәбеҙ. Шулай итмәһәк, беҙ ниндәй малайҙар булабыҙ ти инде?!

Тик бына берҙән-бер көндө минә уйындан тәү тапҡыр бөтөнләйгә айырылып торорға тура килде. Һәм мин был донъяла уйындан башҡа ла күңелгә ләззәт, йыуаныс биреүсе нәмә бар икәнлеген белдем.

Мин, көндәгесә, сепараттың талғын ғына геүләгән тауышына уянып киттем.

- Зыйыңңң... зыйыңңңң...

Ошо тауышты тыңлап, уяулы-йоҡоло иҙерәп ятырға яратам мин. Әйтерһең, өй эсендә үк ниндәйҙер кескәй генә самолет туҡтауһыҙ әйләнеп йөрөй, эргәмдә генә селтерҙәп йылға аға, быныһы - сепарат һемәгәнән биҙрәгә һөт ағыуы инде, усаҡ аҫтында сарт-сорт килеп ут яна, тәҙрәнән төшкән ҡояш нурҙары битемдән йомшаҡ ҡына итеп һыйпай...

Шулай ята торғас, мин ҡабат йоҡлап китәм, ҡояш байтаҡ күтәрелгәс кенә тора инем. Бөгөн иһә яңынан ойорға өлгөрмәнем, сепараттың геүләп әйләнеүҙән туҡтауы булды, әсәйемдең тауышын ишеттем:

- Кинйәбай, тор, улым, тор. Бар, тышҡа сығып, йоҡондо осороп ин.

Ниңә былай иртә торғоҙа икән әсәйем? Бүтән саҡта Хәшейә апайым уятырға итһә лә:

- Нинә бимазалайһың уны? Йоҡоһо бөткәнсе йоҡлаһын, - тип, уны тыя торғайны.

Шулай уйланып, икеләнеберәк ята инем, ишек асылды, кемдер инде.

- Һаумы, Хәтирә килен.

Тауышынан танының - Йәноҙаҡ бабай. Ул, бесән эшләү өсөн көндәрҙең матурланып китеүенә ҡыуанып, аҙыраҡ хәбәр һөйләп ултырҙы, шунан йомошон әйтте.

- Хәтирә килен, бөгөн бакуйҙы төшкә тиклем йыйып бөтһәк, кәбән ҡойоп ҡайтырмын тигәйнем. Ос һәнәгеңде биреп тор әле. Шул бер ос һәнәклек тура килтереп, эшләп ала алмай ҡартайылды инде.

Бесән ваҡыты еттеме, йыл да ошо йомошҡа инә, ошо уҡ һүҙҙәрен һөйләй Йәноҙаҡ бабай. Ауылыбыҙҙы осһоҙ-сикһеҙ урмандар уратып алһа ла, ос һәнәклек табыу уйын эш булмауын мин дә беләм. Һабы ун метрлы, ос йә дүрт йәпле һәнәк эшләрлек матур асалы ҡайын табыу өсөн әллә ни ҡәҙәрем урман гиҙеп тә буш ҡул менән ҡайталар. Ә бына атайым шундай ҡайынды тапҡан булған. Уны йышып, шымартып, йәптәрен һелкәүесләндереп бөгөп, шундайын матур итеп эшләгән, бесәндә күбәнән һоҫоп ҡына алмалы. Шулай бик ҡулайлы булғанға, иткенең торғанғалыр инде, Йәноҙаҡ бабай:

- Ир маҡтаныр, ҡорамал эшләр, тип белмәй әйтмәгәндер шул. Ошо һәнәк менән кәбән һалғанда һис арымайым, - ти.

Эйе, атайым үҙе үлгәндән һуң ҡалған ҡомартҡы ул, ос һәнәге. Уны әсәйем, бесән ваҡыты үтеү менән, йәптәре тарбағайланмаһын өсөн, йүкә менән бөрөп бәйләп, һыу төшмәçлек ергә - өй ҡыйығы эсенә һалып ҡуя. Һораған бер ҡешегә биреп тә бармай уны әсәйем. Атайымдан ҡалған берҙән-бер ҡомартҡыны һындырып-фәлән ҡуйырҙар, тиҙер инде. Ә мин шул ос һәнәгән күргән һайын атайымдың тере һынын күҙ алдына килтерәм. Уны һәр саҡ әлеге ос һәнәге менән кәбән һалып йөрөүсе, оҙон кәүҙәле, киң яурынлы, көслө кеше итеп күҙ алдына баҫтырам. Шулай итмәй, атайым ос һәнәген ҡулына тотҡан көйө яҡты донъя менән хушлашты ла инде.

Бынан бер йыл элек булды ул хәл: 1945 йыл беҙҙең өйгә оло шатлыҡ та, онотолмаç ҡайғы ла алып килде. Дүрт йыл буйы кешеләрҙең ҡанын да, күҙ йәшен дә, әсе тирен дә түктергән һуғыш бөттө. Ауылға был хаҡта хәбәр килгәндә, атайым беҙгә госпиталдән хаттар яҙа ине. Ул ҡыштан бирле ята ине инде унда. Әсәйем тәүҙәрәк:

- Ут эсенән тере һөйәге сыҡҡас, шәбәйер, ялт итеп ҡайтып төшөр әле, - тип һөйләнә торғайны.

(Дауамы бар).

ИЖАДХАНА

# "СӘХНӘ - УЛ ХЫЯЛ. СӘХНӘ - УЛ ЯҘМЫШ..."

**"Сәхнә бик усал шул ул, - шулай тине Ниса апай ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәндә. - Башҡа өлкәлә ҡулыңдың эш белеүе, һөнәреңде яратыу етә. Ә сәхнә артыҡ талапсан. Уға барыһы кәрәк. Төҫ-ҡиәфәт… Тауыш… Ваҡыт… Бар булмышың… Хатта тотош яҙмышың…"**

75 йәшлек күркәм юбилейын ҡаршылаған, ярты быуаттан артыҡ ғүмерен театрға бағышлаған Башҡортостандың халыҡ артисы Ниса Миңлевәли ҡыҙы Бакирова, ваҡыт тәғәрмәсен кирегә әйләндереп булһа, барыбер сәхнәне һайлар ине, моғайын. "Сәхнә - бала саҡтан минең хыял ине", - тине бит. Тормош уға бер саҡ һайлау мөмкинлеген дә биргән. Остазы, Өфө сәнғәт училищеһында белем биргән хөрмәтле уҡытыусыһы Кәшфи Фәйруш улы Ғәҙелшин һәләтле студентын Ҡурсаҡ театрына эшкә саҡыра. Өфөлә урынлашыуҙан, фатирлы булыуҙан баш тартып, Ниса апай сәхнәне, 1970 йылдан - Салауат, 1991 йылдан Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрҙары сәхнәһен һайлай. Остазының һораулы ҡарашына "Сәхнәгә шул тиклем һөйөү уята алғаныһыҙға мин гәйепләме ни?" - тип яуап биргән ул.

"Актер һәр геройы яҙмышын йөрәге аша үткәрә, ул булып уйлай, уның тормошо менән йәшәй. Характер сифаттарын булмышына һеңдерә. Тормошта бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәгәндәй, барыһы актерҙың үҙ яҙмышына ла йоғонто яһай", - былар ҙа Ниса апай фекерҙәре. 90-сы йылдар аҙағынан алып Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының даими тамашасыһы буларaҡ, бөгөн Ниса Бакирова ҡатнашҡан спектаклдәрҙе барлайым. Һәр образ күҙ алдынан үтә, хатта ымхәрәкәте, тауышы менән йәнләнә, драмаларҙа психологик тәрәнлеге менән тетрәндерә, комедияларҙа самими булмышы, шаянлығы менән алдыра. Бына ул Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау" комедияһында "урланған әбей" булып, мут йылмайып тоҡ эсенән килеп сыға. Йә "Туғанлыҡ" халыҡ-ара фестивале еңеүсеһе - "Өс таған" спектаклендә сабыр аҡыллы өләсәй булып, Ғабдуллаға тормош һабағы бирә. Йә Флорид Бүләковтың "Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?" трагикомедияһында яҡты күңелле, ҡатмарлы яҙмышлы ҡатын булып баға... Һәр роле яҡын булһа ла, Ниса апайға ошо спектаклдәге Сәлимә образы айырыуса ҡәҙерле. Һөйөклө тормош иптәше, ижадташы, рухташы Филарит Бакиров менән бергә уйнағанғамы, образдың тәрәнлегенәнме - серҙәре күптер. Шуныһына иманым камил, сәхнәлә актриса тыуҙырған ҡатын-ҡыҙ образдары рухи яҡтан көслө, улар һынауҙарға бирешмәй, тормошҡа үсләшмәй, күңелендә ҡояш йәшәтеүсе, уның йылыһын башҡаларға ла өләшеүсе заттарҙан.

Ғөмүмән, Флорид Бүләков драматургияһы Ниса һәм Филарит Бакировтарҙың ижади яҙмышында айырым урын алып тора. "Бүләковты тик Бакировтар ғына уйнай ала", тигән дәбаһа драматург - ҙур баһа, минеңсә. Һуҙ бит ижады Рәсәйҙе, хатта сит илдәрҙе иңләгән драматург хаҡында бара. Ниса апай айырым бер йылылыҡ менән һөйләгән хәтирәләрҙә театр тарихы, уны бар иткән ижад кешеләренең яҙмышы, фиҙаҡәр хеҙмәте сағыла: "Миңә Флорид Бүләков пьесалары буйынса Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры сәхнәһендә ҡуйылған



бөтә спектаклдәрҙә лә уйнарға насип булды: "Онотолған доға", "Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы", "Аптыраҡ", "Һөйәһеңме-һөймәйһеңме", "Мәскәү-Васютки", "Эх, күгәрсенкәйҙәрем". Иптәшем - халыҡ артисы Филарит Бакиров менән бергә ижад иткән спектаклдәр буларaҡ бик ҡәҙерле улар миңә. Тыуған яҡтары - күрше генә районлар - Мишкә менән Балтас - булғанғамы, драматург менән иптәшем бик яҡын аралашты, һәр саҡ телефондан хәбәрләшеп торҙолар. Хәтеремдә, Ф. Бүләков спектаклдәрен эшләгәндә Филарит йыш ҡабатлай торғайны: "Ҡойо ҡаҙыта бит, ҡойо ҡаҙыта!" Тормошто күргән, оҙаҡ йылдар журналист та булып эшләгән драматург пьесалары ҡатлаулы-ҡатлаулы, характерҙары ла, мәғәнәләре лә тәрәндән-тәрән шул. Уның спектаклдәрендә уйнарға түгел, ошо тәрәнлектә йәшәй алырға кәрәк ине. Иптәшем ҡапыл китеп барғас, "Мәскәү-Васютки" спектакле ҡыҫҡа ғүмерле булды - шуныһы ныҡ үкенесле.

Был психологик драмала беҙ - Бакировтар икәү генә уйнаныҡ. Был спектаклдә эшләү бик ҡатмарлы ижади эҙләнеүҙе талап итте..."

Ниса Бакирова башҡорт театры сәхнәһендә характер кимәлендә күтәрелгән ҡатын-ҡыҙ образдарын ижад итте. Актриса үҙ булмышындағы иң күркәм сифаттарын геройыняларына күсереп, уларға ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ йәшәү бирә алды. Тормошта ла ҡәҙерле ҡатын, ике баланың - Лэйсән менән Марселдең әсәһе, өс ейән-ейәнсәрҙең ҡәҙерле өләсәһе булып, ҡатын-ҡыҙ бурысын лайыҡлы үтәгән һәм үтәй ул.

Ниса апайҙың ролдәрен барлайым да, барыбер ҙә уның ижади биографияһына тормошта утты-һыуҙы кискән, бәхетенә юғалтыуҙар, һынауҙар аша өлгәшкән өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙ образдары күберәк яҙған, тигән фекергә киләм. "Сәхнәлә әйткән һүҙҙәрҙән тормошоғоҙға девиз булып күскәне бармы?" - тип һораным актрисанан һөйләшкәндә. Ул ҙур сәхнәгә фатиха биргән Өфө сәнғәт училищеһындағы диплом спектаклен иҫкә төшөрҙө. Америка драматургы Джон Патрик әҫәре буйынса "Ҡәҙерле Памела" фарсы булған ул. Йәшлегендә - ижадының инеш башында Памела инәй образын уйнай Ниса апай. Яҡындарын юғалтып, яңғыҙлыҡҡа дусар булған, хаттар яҙып, Хоҙай менән һөйләшкән Памела Кронки һүҙҙәре: "Кешеләрҙең күңелен төшөрөргә яратмайым. Хоҙай миңә һынауҙарҙы башҡаларға япһармайса, үҙ иңемдә күтәрер өсөн бирҙе". Көслө рухлы, яҡты булмышлы, донъяла изгелектең күберәк булыуына ихлас ышанған, тормошонда ошо инаныуҙарға тоғро ҡалған героиня фекере. Улар актрисаны ғүмер буйы сәхнәлә лә, тормошта ла оҙатып килә.

Иҫәнлек-һаулыҡ һеҙгә, Ниса апай. Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры һеҙҙең менән тәрән, Стәрлетамаҡ тамашасыһы һеҙҙең менән бәхетле, тип әйтке килә. Ошо бәхеттең оҙон-оҙаҡ булыуын теләйек.

**Рита ФӘТҠУЛЛИНА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ОШОЛАЙ ҘА ТЕАТР БУЛА ИКӘН!

**Иғтибар! Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры пластик спектакль әҙерләй. Театр тарихында тәүге тапҡыр! Әҙерлек нисек барыуы, был аҙымға нимә этәреүе тураһында һөйләүен һорап спектаклдең ҡуйыусы-режиссеры Залина УСМАНОВАға мөрәжәғәт иттек:**



- Театр сәнғәте бер урында тормай, ул үҫешә, яңынан-яңы жанрҙар килеп сыға. Элек, мәҫәлән, импровизация алымдары йыш ҡулланылған, йәғни, актерға йүнәлеш бирелә лә, артабан ул импровизация менән уйнап алып китә. Хәҙер ана шундай онотола барған жанрҙар ҡулланылған спектаклдәр кире ҡайта башланы - донъя буйынса ла, Рәсәй театрҙарында ла. Тамашасылар бер үк драма, трагедия, комедияларҙан алҡты. Мәҫәлән, бейеү, йыр булған сәхнәләрҙе улар ихлас ҡарай, шиғыр һөйләй башлаһаң, һирәктәр генә тыңлай, монологтар ваҡытында күптәр иғтибар туплай алмайҙар. Шуға күрә бөгөнгө көндә пластик спектакль үтемлерәк, тигән фекерҙәмен.

Актерҙар һөнәри белем алған саҡта сәхнә хәрәкәте, ритмика, бейеү буйынса дәрестәр ала. Сәнғәт академияһында уҡығанда үҙем дә шундай дәрестәрҙе яратып торғайным. Театрға эшкә килгәс тә һағына торғайным, сөнки ул һәләт яйлап юҡҡа сыға башлай. Актерҙарҙың ындай мөмкинлеге ҡайны бер спектаклдәрҙә генә ҡулланылыуы ихтимал, дөйөм алғанда, юҡ кимәләндә, улар ҡата, тәрлә трюктарҙы онота башлай. Сибай колледжында сәхнә хәрәкәте буйынса уҡыта башлағас, ошо турала йыш уйлана торғайным һәм студенттарым менән пластик спектакль әҙерләнек. Беҙ уны 9 майҙа Еңеү байрамына "Сулпан" балалар театрында ҡуйҙыҡ. Шунда балаларҙың шым ғына, телефондарына әүрәмәй, сәхнәләге хәрәкәттәрҙе ихлас ҡарап ултырыуҙарына ҡыуанғайным. Бына нимә кәрәк икән балаларға, тигән фекер ҙә яңғырағайны, сөнки сәхнәлә барған ваҡиғаларҙы улар һүҙһеҙ ҙә аңлап ҡабул иттеләр.

Театрҙа режиссер булып эшләй башлағас та ошо илаһи мәл күңелдә һаҡланып килде. Пушкин карталары буйынса мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы театрға әйҙәй башлағас, пластик спектакль ҡуйыу хыялы тағы уянды һәм театр етәкселегенә тәҡдим иттем. Беҙҙә әле пластик спектакль ҡуйылғаны юҡ. Йәш актерҙарға уйымды еткергәс, уларҙың ҡыуанғанын күреп, уртаҡ теләк менән булған мөмкинлектәрҙе ҡулланып эш башланыҡ. Спектаклдең хореографы ла, сценографы ла үҙем, көйҙәрҙе Рәмил Әминев менән бергәләп һайлайбыҙ, тәрлә тауыштар ҡулланабыҙ. Хәрәкәттәр һәм музыка аша сәхнәлә нимә барғанын тамашасыға алып барып еткерербеҙ, тип уйлайым.

Спектаклдең йөкмәткеһе һуғыш осорондағы кешеләрҙең яҙмышы тураһында. Беҙ донъяға тыуабыҙ, үҫәбеҙ, ниндәйҙер маҡсаттар менән йәшәйбеҙ, әммә алда ни булырын белмәйбеҙ. Хәҙерге заманды алғанда, мәҫәлән, донъяның шулай кинәт үҙгәререн белдекме? Юҡ, әлбиттә! Ваҡиғалар Бөйөк Ватан һуғышы осоронда бара. Бер-береһенә ғашиҡ булып, татлы уй-хыялдар менән йәшәгән егет-ҡыҙҙарҙың тормошон һуғыш селпәрәмә килтерә. Егеттәр, әлбиттә, һуғышҡа китә, ҡыҙҙар оҙаталар, аҙаҡ эвакуация, ҡорбандар, пленға эләгеүҙәр - бөтәһе лә була. Бында һуғыш үҙе түгел, ә кешеләрҙең һуғыш осорондағы яҙмышы күрһәтеләсәк. Беҙҙе халыҡсан театр, тиҙәр. Тамашасыларыбыҙҙың зауығы ла шундай. Театрҙы үҫтереү, йәш тамашасылар йәлеп итеү өсөн яңы формалар эҙләү. Төп маҡсатым - театр ошолай ҙа була икән, тиһендәр.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

✓ **Һалҡын яратҡан кешеләр оҙағыраҡ йәшәй икәне билдәле. Ғалимдар был күренештең сәбәбен асыҡлаған. Баҡтиһәң, һыуыҡ күҙәнәктәр кимәлендә организмды зарарлы аҡһым берләшмәләренән таҙарта ала икән.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТ ЕТМӘЙ БАЛАЛАРҒА

■ Бөгөнгө балалар йүгереп уйнау, саф һауала йөрөү тигәндә белмәй тиерлек. Хәрәкәт етмәү, үҙ сиратында, сәләмәтлек менән бәйле төрлө проблемаларҙы тыуҙыра, тип саң ҡаға ғалимдар. Әйтәйек, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары, һимереү, 2-се типтағы диабет тап аҙ хәрәкәтләнеү менән дә бәйле. Бристоль һәм Эстер университеттары ғалимдары үткәргән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ошо сәбәп арҡаһында үҫмерҙәрҙең йөрәге ҙурая икән. Ғалимдар 530 үҫмерҙең кардиометаболик сәләмәтлеге менән физик әүҙемлеген сағыштырып ҡараған һәм йөрәк массаһының ҙурайыуы менән аҙ хәрәкәтләнеүҙең бәйләнеше барлығын асыҡлаған. "Үгеҙ йөрәге" синдромы өлкән кешеләрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә, шулай уҡ кешелә иртә үлем хәүефе 7-20 процентҡа арта. Был хәлгә төшмәҫ өсөн, сәләмәтлекте йәштән ҡайғыртырға кәрәк. Спорт менән шөғөлләнеү йөрәк мускулы үлсәмен нормала тоторға ярҙам итә.

■ Ҡайһы бер кешеләр тәбиғәте менән "яңғыҙ", хатта иң яҡын дуҫтары йыйылған кисәлә лә ул үҙен унайһыҙ тоя. Калифорния университеты ғалимдары билдәләүенсә, бындай кешеләр үҙен уратып алған ысынбарлыҡты ла башҡараҡ ҡабул итә. Һынауҙарҙа социаль әүҙемлеге төрлө булған студенттар ҡатнашҡан. Уларға видеороликтар күрһәткәндәр һәм унан алған тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙы һорағандар. Асыҡланыуынса, яңғыҙлыҡты яратыусыларҙың баш мейеһендәге хис-тойғолар өсөн яуап биреүсе өлөшө башҡараҡ эшләй икән. Әммә башҡалар менән аралашыу һәр кеше өсөн мөһим, тип белдерә белгестәр, шуға ла яңғыҙлыҡты үҙ итеүселәргә лә үҙҙәрен социаль йәһәттән әүҙемерәк тоторға кәңәш итә.

■ Бөгөн гипертония тигән мәкерле сир йәшәрә. Калифорния университеты ғалимдары 30-40 йәштә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларҙы өйрәнеп, уларҙың олоғайғас хәтер юғалтыу хәүеф күңелһеҙлектәргә тарыу хәүефе барлығын асыҡлаған. МРТ күрһәтеүенсә, уларҙың баш мейеһе үҙенең массаһын юғалта икән, был тап ҡартлыҡтағы хәтер менән бәйле проблемаларҙы билдәләргә оҡшаған. Юғары ҡан баҫымы дауалауға бирелә торған сир, шуға уны ваҡытында ауыҙлыҡлап, йәштән уҡ сәләмәтлекте ҡайғыртырға кәрәк, ти белгестәр. Был баш мейеһенең сәләмәт ҡартайыуы өсөн бик мөһим.

■ Һалҡын яратҡан кешеләр оҙағыраҡ йәшәй икәне билдәле. Ғалимдар был күренештең сәбәбен асыҡлаған. Баҡтинһәң, һыуыҡ күҙәнәктәр кимәлендә организмды зарарлы аҡһым берләшмәләренән таҙарта ала икән. Тап уларҙың күбәйеүе тәндә ҡартайта ла инде. Һынауҙар кешеләрҙә генә түгел, йәнлектәр араһында ла үткәрелгән. Асыҡланыуынса, һалҡын хайуандар донъяһында ла ғүмер оҙайлығына килтерә. Тимәк, йылы ятыу - сәләмәтлек өсөн зарарлы, шуға ла үҙегеҙҙе артыҡ йылыға өйрәтмәгеҙ, һалҡынса һауа температураһы кеше һәм барлыҡ тереклек өсөн күпкә ҡулайлыраҡ.

■ Һимеҙлек, башлыса, ҡатын-ҡыҙҙар араһында таралған. Ғалимдар асыҡлауынса, һимеҙлек әсәйҙән ҡыҙына күсеү ихтималлығы ҙур, гәҙәттә, улдарға бындай үҙенсәлек нәҫелдән бирелмәй. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, ҡыҙҙарҙың тән массаһы индексы әсәһенекенә тиң булған. Атайҙан балаларға бындай "бүләк" күсмәй икән. Ошоға таянып, ғалимдар ҡыҙҙар араһында һимереүҙе иртәрәк иҫкәртергә мөмкин тип билдәләй.

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

**Баҡса тигәс тә, һәр кемдең уға үҙ ҡарашы. Кемдер уңышы менән ҡыуандырған алма-ҡарағатын, кишер-кәбеҫтәһен күҙ уңында тота, кемдер сәскә ярата. Кемдер был мәьәләлә бигерәк фәлсәфәүи ҡараштa. Башҡортмон тигән башҡорттоң баҡсаһында мотлаҡ мунса һәм сәй эсергә самауыры булырға тейеш - бейеүсе, балетмейстер, режиссер-ҡуйыусы, ҡурайсы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәис НИЗАМЕТДИНОВ шундай фекерҙә. Рәис Жәүәт улын Илештән, "Ауаз" Башҡорт этник мәҙәниәте һәм заманса сәнғәт фестивалендә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Аманат" этнотөркөмө менән Гран-при яулап ҡайтып ҡына торған сағында тап иттек.**

# МУНСАҺЫҘ - БАҠСА...

## ерһеҙ башҡорт булмай!



➔ **Ҡала кешеһе булып иҫәпләнһә лә, ауылда тыуып-үҫкәндәрҙең ергә тартылыуы тәбиғи инде. Һеҙ ҙә шундай фекерҙәһегеҙме?**

- Беҙ бит башҡорттар, беҙ ер кешеһе, мотлаҡ ер кәрәк. Ниндәй генә унайлы фатирҙарҙа көн итһәң дә, ҡала ситенән йорт алырға ине, тип уйлай башлайһың. Әҙерәк соҡонорлоҡ баҡсаһы, мунсаһы булһа, тип хыялланаһың. Өфө тирәләй ҙә шундай урын эҙләп, йорт һатып алдыҡ. Мунсаһы эшләнеп бөтмәгәйне, уны төҙөп ҡуйҙыҡ. Бик ҡәнәғәтбеҙ, шөкөр. Баҡсала бөтөн нәмәбеҙ бар, емештәрҙең дә, йәшелсәнең дә үҙебеҙҙекен ашайбыҙ. Беҙ үҙебеҙ ялҡау баҡсасы, тик бында ер уңдырышлы, үҙенән-үҙе емерелеп үҫә лә ҡуя.

➔ **Баҡсасының ялҡауы нисегерәк була инде?**

- Йыйылып ятып, баҡса тәрбиәләмәйбеҙ. Йәй етһә, өйҙә лә тормайбыҙ. Баҡсасылар, киреһенсә, йәй ергә талпан һымаҡ ҡаҙалып ята бит инде. Йәй ул йәндә имләү мәле - ҡояш, һыу, ерҙән энергия алып, ҡыш буйы йыйылған кире тойғоларҙан арыныр саҡ. Йылға буйлап ағабыҙ, сәйәхәттәргә сығабыҙ, уҡ атыу буйынса ярыштарға йөрөйбөҙ. Шул беҙ өйҙә булмағанда үҫеп, бешеп торған еләктәрҙе, ҡыярҙарҙы үләнде ярып ебәреп кенә өҙөп ашайбыҙ. Мин ныҡ ҡыҙыҡ баҡсасы ул. Мәсәлән, бер генә алмаһың да сортын белмәйем. Уларҙың 4 төрлөһө үҫә, береһе - һары, береһе - йәшел, береһе - ҡыҙыл, береһе ҡыр алмаһы. Береһе тиҙ генә өлгөрә, икенсеһе ныҡ һутлы, өсөнсөһө ҡар яуғансы ултыра. Грушаның да ике сорты үҫә, береһе ҡапыл ғына бешә, ашап өлгөрмәһәң, бизрә-бизрә булып, ергә ҡойолоп ята. Ә икенсеһе шундай эре грушалар бирә. Беҙгә йортон һатҡан кеше бик яҡшы баҡсасы булған.







Үҙебеҙ ҙә ултырттыҡ төрлөһөнән: сейәләр ҙә, ҡара һәм ҡыҙыл ҡарағат та, слива ла, торн да, алыча ла, әберсә лә (ҡурай еләге), муйыл да, балан да бар. Викторияны уңа, уға ла тәрбиә эләккәне юҡ, ер еләге кеүек ваҡланып бөттөләр. Кәрәк нәмә барыһы ла бар инде, сөгөлдәр, кишер, ҡабаҡ, ташҡабаҡ, борсаҡ - барыһы ла үҫә. Варенье ашамайбыҙ, емештән ҡаҡ эшләйбеҙ, киптерәбеҙ. Тундырғаның сей килешләй ҙә ашайбыҙ, бәлештәргә эслек итеп тә ҡуллана еңгәгеҙ. Боронғо ата-бабалар шул тиклем аҡыллы булған бит ул, емештәрҙән ҡаҡ ҡойған, бар витаминдары ла һаҡланған.

➔ **Һеҙҙең олатай булыу ҡыуанысын кисереп йөрөгән сағығыҙ. Ейәнегеҙ баҡсала ярҙамлаша башламанымы әле?**

- Былтыр бәләкәйерәк булды, быйыл бөтөн ерҙе һыҙырып йөрөр тип көтөп торабыҙ. Яңыраҡ килгәйнеләр, "ярҙамлаша", һарымһаҡты йолҡҡан - бер "бушамай". Ер йөҙөндәге иң һәйбәт тойғо икән ул - олатай булыу. Ниндәй эштәр башҡарғанһың, ниндәй дәрәжәләрең, исемдәрең бар - былар барыһы ла ваҡланып ҡала уның алдында. Ниндәй бәхет күрҙең һин йәшәү дәүерендә, тип һораһалар, олатай булыу бәхетен тиер инем, Аллаға шөкөр. Йәшәүҙең мәғәнәһе - тиң ҡартайып, балаларҙың балаларын ҡарап ултырыуҙа икән. Балалар килһә, мотлаҡ самауыр ҡайнатабыҙ, күңелле бит. Төтөн еҫен яратам мин, самауыр иһә бала саҡты иҫкә төшөрә, самауыр сәйе эсеп үҫтек. Башҡорттоң шул еренән тыш, тағы ла самауыры булырға тейеш инде.

➔ **Самауыры ла, тағы мунсаһы инде. Мунса ул шулай уҡ фәлсәфәүи бер күренеш, тәндең генә түгел, йәндең таҙарыныу урыны...**

- Мунса, тәү сиратта, сәләмәтлек сығанағы. Мунсала юғары температура, дымлылыҡтан бөтөн процестар әүҙемләшә. Иғтибар итегеҙ, мунсала бөтөн стихиялар ҙа - ут, һыу, ер, һауа берләшкән. Ул яңырыу урыны. Ғөмүмән, мунсаның ниндәй файҙаһы бар икән тип уйлағаным да юҡ, миңә хис-тойғолар мөһимерәк. Ҡышын эҫе мунсанан сығып, ҡарға сумырға яратам. Тән янып китә, мендәрләгән энәләр ҡаҙалған кеүек була. Ошо кисерештер оҡшай миңә. Миндекте үҙебеҙ әҙерләйбеҙ. Кеше ынғайына имән, йүкә миндеге әҙерләгәнебеҙ бар, тик уларға күңел ятмай. Беҙ ҡайын миндегенә өйрәнгәнбеҙ, ҡайындыҡына етмәй инде. Мәтрүшкә, һары мәтрүшкә генә ҡыҫтырып бәйләйһең.

Йәй күп йөрөйбөҙ, тигәйнем бит инде. Махсус рәүештә ҡыр мунсаһы һатып алғанбыҙ. Тимер рәшәткәбеҙ бар, шуның аҫтына 4 таш ҡыҫтыраһың да, өҫтөнә йылға буйынан йыйып алған таштарҙы һалып, ҡыҙҙыраһың. Әҙер булғас, палатҡаға оҡшаған брезент мунсаны ҡораһың. Бик йәтеш мунса ул, быуы енел. Йәйен, яҙын, көҙөн төшөргә була бындай мунсаны. Уның тағы бер кинәнесе - сығып, шунда уҡ һыуға ырғыйһың. Бигерәк тә һыу һыуыҡ саҡта кисерештәр сағыуыраҡ. Ирәмәлдә, Ағиҙелдең башында мунса төшкәнем бар. Унда йылғаның киңлеге метр ғына, тик ныҡ һыуыҡ. Ағиҙелгә төшөп, килеп сығыу менән янынан тыуған кеүек хис иттем үҙемдә. Төрлө алама уйҙар, тойғолар, кисерештәр юғала бит ошо мәлдә. Тәнең менән йәнең дә таҙара. Балаларҙы ла тәбиғәтте яратырға, тәбиғәт ҡосағына сығырға өйрәттек, хәҙер үҙҙәре лә йә тауҙарҙа, йылға-күлдәрҙә йөрөп яталар. Бының бер насарлығын да күрмәйем мин. Ғәләмәт матур илдә йәшәйбеҙ бит, Башҡортостаныбыҙҙың йөрөр, күрер урындары күп әле.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Минән шикләнгәнеңә иламайым. Инде бер йыл үтһә лә, һеҙҙең берегеҙҙең дә Ҡөрьәнде бер тапҡыр булһа ла асып ҡарамағанығыҙға илайым! Әгәр уны асып ҡараһағыҙ, унда үҙегеҙҙең аҡсағыҙҙы тапҡан булыр инегеҙ!*



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БЫЛ КИТАП...

## кәштәгә һалып ҡуйыр өсөн түгел!

**Бала сағымдан дин тотоусы, намаҙ уҡыусы оло кешеләрҙең әңгәмәләрен тыңларға әүәҫ булдым. "Аяҡ быуындары ауыртҡас, Фәләнбикә әбей Ҡөрьән битен йыртып алып, аяҡтарына бәйләй икән. Нишләп улайтырға? Тома наҙанлыҡ бит был!" тип һөйләшкәндәре лә хәтеремдә ҡалған. Мин, пионерия тәрбиәһендә үҫеп килгән малай булараҡ, үҙемсә генә фекерләп, был һүҙҙәрҙе үҙемсә генә хуплай инем. Әммә бөгөнгө көндә әлеге олатайҙарҙың шул һүҙҙәренең асылына төшөнөп, ни өсөн улар шул әбейҙе тәнҡитләгәнен ысын мәғәнәһендә аңланым. Изге Китапты дөрөҫ ҡулланмауға ризаһыҙлыҡ белдергән, үҙҙәре Ҡөрьән уҡып ғүмер иткән шул иманлы ҡартатай-ҡәртәсәйҙәребеҙҙе оло ихтирам менән иҫкә алам.**



Әлеге көндә лә был Китаптың тәғәйенләнешен бөтөнләйгә тиерлек белмәүселәр аҙ түгел. Бәғзеләрҙең "шайтан килмәһен өсөн" уны баш аҫтына һалып йоҡлауы тураһында ла ишеткәнем бар. Икенселәр, башта әйтмешләй, ауыртҡан еренә ҡуйып, унан шифа өмөт итә. Ҡөрьән - үлгән кешеләргә мулла уҡый торған ғына ябай әсбап тип һанағандар ҙа юҡ түгел. Ә күпселек уны фәҡәт китап кәштәһендә генә тота, "өйгә ҡот һәм бәрәкәт биреп ятһын өсөн"...

Ауыл-ҡалаларыбыҙҙа изге Ҡөрьән-Кәрим китабы булмаған бер өй ҙә юҡтыр, тип уйлайым. Был - бик тә яҡшы. Кемдәрҙәлер уның башҡортсаға тәржемә ителеп, дөрөҫ уҡырға өйрәтә торған транскрипцияһы менән бирелгән варианты ла бар. Тик бик күптәр был китапты асып та ҡарамай, унда ни яҙылғанын белмәү тураһында әйтеп тороһы ла юҡ! Иң башта әйтмешләй, Ҡөрьән аяттарының дауалау көсө барлығы шикһеҙ, әлбиттә. Әммә, ана шундай ниәт менән йә иһә шайтанды яҡынлатмау, Аллаһы Тәғәләнән сауап, бәрәкәт алыу өсөн дә ул аяттарҙы фәҡәт уҡыу (үҙең әлегә уҡый белмәһәң, белгән кешенән уҡытыу) кәрәк!

Ошо темаға ҡағылышлы "Аҡсаны кем урлаған?" тип аталған бер риүәйәт төрлө баҫмаларҙа, "Киске Өфө"лә лә баҫылып сыҡҡайны. Ифрат фәһемле булған шул риүәйәттең йөкмәткеһен тағы иҫкә төшөрәйек: "Ниндәйҙер ауылға йәш имам тәғәйенләгәндәр. Ул Ҡөрьәнде тулыһынса яттан белгән, урындағы халыҡтың ерле һөйләшен яҡшы аңлаған һәм ҙур ғилемгә эйә булған. Был имамды халыҡ бик яратып ҡабул иткән, бөтә ғаиләләр ҙә уны үҙҙәренә саҡырып, ҡунаҡ итергә тырышҡан. Оҙаҡ ҡына көткәндән һуң бер ғаиләнең сираты еткән. Улар имамды рамаҙан айында ифтарға саҡырып, бик йылы ҡаршылаған һәм ҡунаҡ иткән. Имам улар өсөн доға ҡылып, ҡайтып киткән. Хужабикә ҡунаҡ бүлмәһен йыйыштыра башлағас, өҫтәлгә һалып торған аҡсаһының юҡлығын шәйләп ҡалған. Ул бөтә ерҙе ҡарап бөткән, ләкин аҡсаны тапмаған. Ире тәрәүих намаҙынан ҡайтып ингәс, ҡатын унан: "Өҫтәлдәге аҡсаны һин алманыңмы?" - тип һораған. Ире: "Юҡ" - тигән. Шулай итеп, ир менән ҡатындың икеһендә лә "Аҡсаны имам алған", тигән шик тыуған. Ир кеше: "Нисек имамдың быға ҡулы барҙы икән? Мин бит уны изге рамаҙан айында өйөмә ҡунаҡҡа саҡырҙым! Ул бөтә кешегә үрнәк булырға тейеш бит!" - тип, бик ныҡ асыуланған. Йәне ныҡ көйһә лә, ир бик баҫалҡы һәм тыйнаҡ кеше булған, шуға ла был турала бер кемгә лә ләм-мим өндәшмәгән, имамдың үҙен дә борсоп тормаған. Тик был хәлдән һуң уға осрамаҫҡа, уның менән һөйләшмәҫкә тырышҡан. Тағы бер йыл үтеп киткән. Әлеге ғаиләнең имамды ифтарға саҡырырға тағы ла сираты еткән. Был юлы уны саҡырырғамы-юҡмы тип бик оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, ҡатыны ирен күндергән: "Бәлки, имамдың хәле бик ауыр булғандыр, шулай эшләүҙән башҡа әмәле ҡалмағандыр... Беҙ уны ғәфү итәйек. Аллаһ та беҙҙе ғәфү итер", - тигән ҡатыны.

Ифтар тамамланғас, шулай ҙа йорт хужаһы имамға әлеге борсоған һорауын бирергә булған:

- Үткән рамаҙандан һуң минең һиңә мөнәсәбәтем үҙгәргәненә иғтибар иткәнһеңдер? - тип һораған.

- Эйе, тик бының сәбәбен асыҡлай алманым, эшем дә күп булды, - тигән имам.

- Мин һиңә бер һорау бирәм, тик һин дөрөҫ кенә яуапла! Минең ҡатыным өҫтәлгә аҡса һалып торған, ә беҙ уны һин килеп ҡайтҡандан һуң таба алманыҡ. Аҡсаға һин тейгәйнеңме?

- Эйе, мин...

Йорт хужаһы үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмаған. Ә имам артабан шулай тип дауам иткән:

- Аҡса өҫтәлдә ята ине. Асыҡ тәҙрәнән кинәт кенә ел инеп, аҡсаларҙы иҙәнгә осорҙо. Шунан мин уларҙы йыйып алдым да...

Имам шул саҡ илап ебәргән һәм шулай тип өҫтәгән:

- Ниңә илағанымды беләһеңме? Минән шикләнгәнеңә иламайым. Инде бер йыл үтһә лә, һеҙҙең берегеҙҙең дә Ҡөрьәнде бер тапҡыр булһа ла асып ҡарамағанығыҙға илайым! Әгәр уны асып ҡараһағыҙ, унда үҙегеҙҙең аҡсағыҙҙы тапҡан булыр инегеҙ!

Хужа Ҡөрьәнгә үрелгән. Уны асып ҡарағас, эсендә бөтә аҡсаһының теп-теүәл ятҡанын күргән..."

Ошо риүәйәтте уҡығас, минең дә күҙҙәремә йәш килде. Эйе, ысынлап та ҡыҙғаныс хикәйәт. Ә бит Ҡөрьән-Кәримде тотоп та ҡарамағандар беҙҙә лә аҙым һайын! Үкенескә, был Китаптың нисек яҙылғанлығы һәм уның төп тәғәйенләнеше хаҡында белеүселәр ҙә һирәк. Бәғзе берәү уны Мөхәммәт бәйғәмбәр с.ғ.с яҙған тип тә уйлай, ниндәйҙер башҡа бер кеше тарафынан яҙылған тип һанаусылар ҙа юҡ түгел. Тик уның егерме өс йыл дауамында Бәйғәмбәребеҙгә с.ғ.с Аллаһы Тәғәлә тарафынан аят-аят итеп төшөрөлгәнлеге хаҡында һәммәбеҙ ҙә белергә тейешбеҙ. Бәғзе аяттар Ябраил фәрештә аша тапшырылһа, икенселәре Бәйғәмбәребеҙгә с.ғ.с. туранан-тура вәхи ҡылынған (йөрәгенә һеңдерелгән). Әйткәндәй, Мөхәммәт с.ғ.с. бөтөнләйгә уҡый-яҙа белмәгән. Аллаһы Тәғәләнән төшөрөлгән һәр бер аятты Расүлуллаһ с.ғ.с шунда уҡ сәхәбәләренә һүҙмә-һүҙ һөйләп бирер булған. Ә сәхәбәләр уларҙы ятлап алған, яҙа белгәндәре ҡағыҙға яҙып та барған. Бына шул Китап аша әҙәм балаларына динебеҙ талаптары өйрәтелгән. Мөхәммәт с.ғ.с - иң һуңғы бәйғәмәр, ә Ҡөрьән - иң һуңғы Китап. Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр башҡа бәйғәмбәр һәм китап та булмаясаҡ. Бәғзе берәү "Ҡөрьән әллә ҡасан уҡ яҙылған, шуға күрә хәҙер иҫкергән, беҙҙең заманға тап килмәй", тип фәлсәфә һатырға ярата. Беренсенән, "Ҡөрьән яҙылған" тип әйтеү бигүк дөрөҫ түгел, ә "Ҡөрьән төшөрөлгән" тиеү кәрәк. Икенсенән, ниндәй генә замандар етмәһен, ул Ҡиәмәт көнөнә тиклем иҫкермәйәсәк һәм үҙгәртелмәйәсәк. Ҡөрьәндең Әл-Бәҡара сүрәһендә ошолай тип әйтелә: "Ошо китап, һис шикһеҙ, тәҡүәле кешеләргә ҡулланма, ғәйеп (күҙгә күренмәгән) нәмәләргә иман килтереүселәргә һәм намаҙҙа торосыларға..."

Ошо изге Китапты - ҡулланманы мөмкин тиклем өйрәнеп, ундағы ҡушҡандарҙы үтәп, тыйғандарынан тыйылып ғүмер итергә ынтылайыҡ, ҡәҙерле туғандар. Бик күп аяттарҙың тәржемәләрен уҡып та, төшөнөп етмәүебеҙ бар, әлбиттә. Әммә улар Ислам ғалимдары тарафынан тәфсирләнеп (мәғәнәһе аңлатылып), китап итеп тә яҙылған (мосолман кибеттәрендә һатыла). Улары ла аңлашылып етмәгән хәлдә, хәҙрәттәребеҙгә мөрәжәғәт итеү ҙә тыйылмай бит. Бөгөнгө көндә һәр ауылда тиерлек мәҙрәсә, хатта Ислам университеты тамамлаған ғилемле имамдарыбыҙ бар, әлхәмдулиллаһ. Уларҙан динебеҙ ҡанундарын өйрәнергә тырышайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

### Байығыуҙың дүртенсе ысулы: аҡсаңды юғалыуҙан һаҡла

- Бәлә беҙҙе уңышлы эшләгән саҡта ла һағалап тороусан, - тип дауам итә Аркад дүртенсе дәресен. - Шуға ла көшөлөктәге аҡсаны ышаныслы һаҡлау ҙа мөһим. Инвестициялауҙың беренсе төп принцибы - ул һеҙҙең төп капиталдың хәүефһеҙлеге. Шуға ла ниндәйҙер мөмкинлектәрҙе ҡулланыр, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ тәҡдим иткән проекттарҙы ҡабул итерҙән алда ошо хәүефһеҙлекте тикшереп ҡарағыҙ, гарантияларын өйрәнегеҙ. Үҙегеҙҙең тиҙ байығыу кеүек романтик теләгегеҙгә бирелмәгеҙ. Кешегә бурысҡа аҡса бирер алдынан башта уның ул аҡсаны ҡайтарып бирә аламы, юҡмы икәненә ышанығыҙ.

Мин үҙем был тәңгәлдә шундай хата эшләгәйнем. Бер йыл буйы йыйған аҡсамды ҡиммәтле биҙәнгестәр алып ҡайтырға ҡушып, сәйәхәткә китеүсе ташсы Азмурға биргәйнем. Ул биҙәнгестәрҙе һатып, һуңынан аҡсаһын бүлешергә һөйләшкәйнек. Ләкин финдар Азмурҙы төп башына ултыртып һәм уға быяланан эшләнгән биҙәнгестәр һата. Мин шулай үҙемдең бар аҡсамды юғалтҡайным.

Бөгөн мин үҙемдең тәжрибәмдән сығып ул саҡта ҙур ахмаҡлыҡ эшләгәнемде таныйым: ташсыға ҡиммәтле биҙәнгестәр һатып алыу эшен ышанып тапшырырға кәрәкмәгән. Шуға ла мин һеҙгә шундай кәңәш бирәм: хаталанмайым, тиһәгеҙ, инвестиция өлкәһендәге үҙегеҙҙән генә белемгә ышанмағыҙ. Иң тәүҙә капиталын уңышлы һәм төшөмлө тотона белгән аҡыллы кешеләр менән кәңәшләшегеҙ. Шунан һуң ғына аҡсағыҙҙы хәүефһеҙ булған һәм ҡайтарып ала алған эшкә һалығыҙ.

### Байығыуҙың бишенсе ысулы: "Аҡсағыҙҙы килемле тотонам тиһәң, үҙ йортоңдо төҙө йә һатып ал"

Әгәр ҙә кеше үҙе эшләп тапҡан аҡсаның ундан тугыҙ өлөшөн ашау-эсеүгә, тормош ләззәтлектәренә генә тотонмай, унан килемле инвестицияға ла өлөш сығара икән, ул саҡта уның байлығы тиҙерәк үҫәсәк, - бишенсе дәресен шул һүҙҙәрҙән башлай Аркад.

Вавилондың бик күп кешеләре балаларын уңайһыҙ шарттарҙа үҫтерергә, етмәһә, фатир, йорт хужаларына аренда өсөн ҙур аҡса түләргә мәжбүр, - тип дауам итә Аркад. - Үҙенең йорт участкаһы, балалары киңәнеп уйнарлыҡ ихатаһы, сәскә генә түгел, төрлө емеш-еләк үҫтерер баҡсаһы булмаһа, бер генә ғаилә лә тормошҡа ҡыуанып йәшәй алмай. Үҙең үҫтергән ағастың емешен әҙәп ҡабыуҙан, үҙеңде иркен тойоп, рәхәтләнеп ял итә алған йортоң булыуҙан да ҙурыраҡ бәхет юҡ бит ул. Шуның өсөн һинең һәм ғаиләңде һыйындырған үҙ йортоңдо булдырырға тырышығыҙ. Быны һәр кем булдыра ала, булдырырға бурыслы.

Йорт төҙөргә йә һатып алырға теләгән кешегә бер ниндәй ҡаршылыҡ та юҡ. Арендаға алған фатир хужаһына түләгән аҡсағыҙҙы ростовщикҡа кредит өсөн түләгеҙ. Үҙ йорто булған кешегә бәхет йылмаясаҡ. Ул саҡта ул йәшәү өсөн тотонған сығымдарын да кәметә барыр. Шулай итеп, байығам тиһәгеҙ, ошо бишенсе ысулы ла ҡулланығыҙ: үҙегеҙҙең йортоғоҙҙоң хужаһына әйләнегеҙ.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



### 24 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 0.10, 1.20, 2.05, 2.50, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.50 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Я ушла на войну". "Ано тв-Новости". [16+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Красный Паша". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 25 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 "Автограф". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00 Брифинг.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Хаджи Эфенди женится". [12+]**
**2.45 Бай. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 26 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30, 17.45 История одного села. [12+]**
**10.45 Әлләсе... [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Сваха". [12+]**
**2.45 "Автограф". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 27 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени". Новые серии. [12+]
0.20, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 "45-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное закрытие".
3.10 Х/ф "Зойкина любовь". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!.." [12+]**
**3.00 История одного села. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 28 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.55 "Вызов. Первые в космосе". [12+]
0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
3.25 Х/ф "Свой-Чужой". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 2.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.15 Ҡурай даны. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Аплодисменты. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 3.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00, 3.15 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Спектакль "Любовница. [12+]**
**4.00 "Ете егет". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

### 29 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.10 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/с "Рюриковичи". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
19.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф Премьера. "Эйфель". История создания символа Парижа. [16+]
1.50, 2.35, 3.15, 3.50, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Х/ф "Токсичная любовь". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Очень плохая невеста". [12+]
0.40 Х/ф "Добежать до себя". [12+]
3.50 Х/ф "Белое платье". [16+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Это моя профессия. [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Этно-краса. [6+]**
**11.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.30 "Байтус". [6+]**
**11.45 "Семәр". [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Аҡ ҡалфаҡ". [12+]**
**19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 3.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Концерт заслуженной артистки РБ Лилии Биктимировой. [12+]**
**2.00 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]**
**4.15 Д/ф "Я ушла на войну". [16+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

### 30 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.30, 1.15, 1.55, 2.35, 3.10, 3.45, 4.20, 4.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Д/с "Рюриковичи". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 Премьера. Международный конкурс песни на русском языке "Автора!" Финал. [12+]

### РОССИЯ 1
6.15, 3.10 Х/ф "Личные счеты". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Петросян-шоу. [16+]
15.00 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Любовь для бедных". [12+]
4.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**16.30 "Честно говоря". [12+]**
**17.15 Әлләсе... [6+]**
**18.00 "Укытыусыма". [0+]**
**20.00, 4.15 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Спортивная история. [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Бенефис народной артистки РБ Альфии Каримовой. [12+]**
**1.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

*✓ Заман эстрадаһына килгәндә, уның тағы ла яҡшыраҡ, юғарыраҡ кимәлдә булыуын теләр инем. Йәштәр тырыша, шулай ҙа аранжировкаларҙы яҡшыраҡ яҙҙырыуға, башҡарыу һәләтен күтәреүгә иғтибар күберәк бүленергә тейеш.*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЙӨРӘКТӘН-ЙӨРӘККӘ...

## ижади күпер һалына

**Ошо көндәрҙә Башҡортостандың халыҡ артисы, легендар "Каруанһарай" төркөмө солисы һәм етәксеһе Вилдан Ярулин тамашасыларына үҙенең юбилей концертын тәҡдим итте. Баш ҡаланың "Өфө-Арена" универсаль спорт аренаһында уҙған сағыу тамашала билдәле йырсылар һәм ижади коллективтар, сит ил ҡунаҡтары, Башҡортостан һәм Татарстан ижадсылары сығыш яһаны. Гөрләп уҙған концерттан һуң юбилярға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Концертығыҙ үҙегеҙҙә ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?**

- Концерт гөрләп үтте, тамашасыларға матур ял сәғәттәре бүләк иткәнбеҙҙер, тип ышанам. Минең юбилей концертымды йәмләп килгән ижадташ дуҫтарыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Сәхнәнән Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы Салауат Фәтхетдинов, Үзбәкстандың халыҡ артисы Фәрух Закиров етәкселегендәге "Ялла" төркөмө, Төньяҡ һәм Көньяҡ Осетияның халыҡ артисы Феликс Царикати, Мәскәү ҡалаһынан "Земляне" төркөмө, Башҡортостандың халыҡ артисы Әнүәр Нурғәлиев, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Зәйнетдин, Марсель Ҡотоев, Филүс Ҡаһиров һәм башҡа билдәле йырсылар сәләмләне.

Бер нисә көн үтһә лә, концерттан алған яҡшы тәьҫораттар, йылы тойғолар сорналышындамын һаман. Ағайым Хәлит Ярулин һәм продюсер Резедә Зарипованың тамашаны "Өфө-Арена"ла үткәрергә тигән тәҡдименә риза булыуыма шатмын, сөнки Башҡортостанда иң ҙур спорт ҡоролмаһы һаналған майҙанда сығыш яһау мәртәбәле лә, ҙур яуаплылыҡ та. Һәр бер концерт йырсы менән бергә тығыҙ эшләгән ҙур команданан тыш юғары кимәлдә уҙа алмай. Мин был йәһәттән уңышлы йырсы, сөнки һәр ваҡыт янымда ышанысл команда булды. Әлеге концертты ла улар менән бергә атҡарып сыҡтыҡ. Концерттың икенсе көнөндә ижадташ дуҫтарым менән Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалдыҡ.

**➔ Концертта үҙегеҙгә ҡуйған маҡсаттарға өлгәшә алдығыҙмы?**

- Мин бер ҡасан да ижадҡа илке-һалҡы ҡараманым. Бер йыр булһынмы ул, тотош концерт булһынмы - һәр саҡ бөтә булмышымды биреп йырланым. Әлеге юбилей концертымды ла юғары кимәлдә үткәреү өсөн бар көсөмдө, ынтылышымды, булмышымды һәм һәләтемде һалдым. Тамашасыларым күңеленә һәр бер йырҙың бөтә нескәлеген алып барып еткереү, ижади хис-тойғоларымдың концертҡа килгән барлыҡ ҡунаҡтарымдың да йөрәгенә үтеп инеүе, йәғни йөрәктән-йөрәккә ижади күпер һалыу маҡсатына тулыһынса өлгәшкәнмендер, тип ышанам. Концерттан һуң тамашасыларҙан килгән юғары баһаламалар ҙа ошо хаҡта һөйләйҙер, моғайын.

**➔ Һеҙҙе беҙ талантлы йырсы итеп кенә түгел, ә күп һанлы концерт, кисә һәм осрашыуҙар үткән "Башҡортостан" дәүләт концерт залының етәксеһе булараҡ та беләбеҙ. Етди, күп ваҡытты алған етәкселек эшенән бушап, ижадҡа ваҡыт еткереп буламы?**

- Аллаға шөкөр, ижадҡа ваҡыт табам, яңы йырҙар яҙҙырам, сәхнәләш дуҫтар менән бергә эшләү мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмайым. Шулай уҡ ваҡытҡа ҡарап, ял көндәренә тура килтереп, төрлө концерт, спектаклдәргә йөрөргә тырышам. Үҙебеҙҙең "Каруанһарай" төркөмөнөң эшмәкәрлеге лә әүҙем генә бара. Ғөмүмән алғанда, күңел сәнғәт тип янғанда, йөрәк йыр-моң тип типкәндә ижадҡа ваҡыт үҙенән- үҙе табыла.

**➔ Башҡорт эстрадаһының легендар йырсыһы булараҡ бөгөнгө йыр сәнғәтенә, йәштәрҙең ижадына ҡарашығыҙ хаҡында ла белергә ине.**

- Бөгөнгө заман эстрадаһына килгәндә, уның тағы ла яҡшыраҡ, юғарыраҡ кимәлдә булыуын теләр инем. Әлбиттә, йәштәр тырыша, эшләй, ижад итә, шулай ҙа аранжировкаларҙы яҡшыраҡ яҙҙырыуға, башҡарыу һәләтен күтәреүгә иғтибар күберәк бүленергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Аранжировкаларҙың заманса стилдә, ләкин үҙебеҙҙең милли колоритты онотмайынса эшләнгәндәре бик тә отошло һәм уңышлы буласаҡ. Барлыҡ йәш ижадсыларға ла уңышлы эшмәкәрлек теләйем. Ҡыйыу, эшһөйәр булһындар.

**➔ Ижадҡа ҡағылышлы һеҙгә бирелгән кәңәш нисек яңғырай ине?**

- Сәхнәлә ихлас булырға, үҙ тамашасыңды алдамаҫҡа, уны илке-һалҡылыҡ менән кәмһетмәҫкә. Тамашасы барыһын да күреп-белеп тора. Быны мин иң шәп кәңәш, тип һанайым.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МӘҘӘНИ МИРАҪ

Өфөлә Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттарының берҙәм реестры менән идара итеү буйынса Эксперттар советының XIII кәңәшмәһе уҙғарылды. Унда райондарҙың һәм ҡалаларҙың муниципаль исемлегенә, төбәк һәм федераль кимәлдәге реестрҙарға индерергә тәҡдим ителгән 24 матди булмаған мәҙәни мираҫ объекты тикшерелде. Улар араһында Дыуан районы Вознесенка ауылының йыр традициялары, балыҡ бәлешен ҡойроғон тышҡа ҡалдырып бешереү, Дыуан районында түңәрәк икмәктәр (каравашки), ыуыҙ ҡоймағы, мариҙарҙың "пушто" ризығы, мари һәм удмурттарҙың йыр традициялары, "кәләште кейәү йортона оҙатыу" удмурт туй йолаһы, башҡорттарҙа йәнлектәр һәм тәбиғәт тауыштарын оҡшатып ҡабатлау, ыуыҙ байрамы, ҡайын һағыҙы әҙерләү, ҡорама ҡорау алымы, "тыпырҙыҡ" бейеүе, "ҡағиҙәт" ҡатын-ҡыҙ йола бейеүе, яҙҙы оҙатыу, саман, тиҙәк, ағас ҡумыҙ, түбәтәй яһау, армияға оҙатыу, кәләш бирнәһен кейәү йортона алып килеү, аттарҙы менгегә өйрәтеү, йылым менән боҙ аҫтында балыҡ тотоу булды.

Кәңәшмәнән һуң электрон сығанаҡҡа иҫкәрмәләр һәм төҙәтмәләрҙе иҫәпкә алып, 23 объект индереләсәк, шуларҙың 7-һе федераль исемлеккә тәҡдим ителгән. Ошо арала улар Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттарының берҙәм реестры электрон каталогына индереү өсөн федераль Эксперт советына тикшереүгә йүнәлтеләсәк.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘЙЛӘҮГӘ ТУҒАЙ ЯҠШЫ,

## кәңәшкә ағай яҡшы

Ишленең мең ғәйебе юйылыр, яңғыҙҙың бер хатаһы мең булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ысын даһиҙар һирәк осрай ғына түгел, улар тәғәйенләнеше буйынса һирәк файҙаланыла ла.

**(Эдмунд Берк).**

Был донъяла бер ниндәй хәүефһеҙ нәмә юҡ, хәүефтән ҡотолор ысулдар ғына бар.

**(МакАртур).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер батшаның берҙән-бер улы була - ахмаҡ түгел, әммә үҙ-үҙенә ныҡ ышанған, еңел-елпе малай. Ул бар нәмә тураһында ла аҙ-маҙ белә, ләкин бер ваҡытта ла урынында ултырып түҙмәй һәм шул арҡала белемде тулыһынса үҙләштерә лә алмай. Улының был холҡон белгәнгә күрә лә батша уны тирә-яҡта киң билдәле хәрби сәнғәт оҫтаһына уҡытырға ебәрә һәм улында көслө рух, ысын ир-егет характеры тәрбиәләргә бойора. Малай тәүҙә оҫтанан бик тырышып төрлө күнекмәләр өйрәнә. Ләкин тиҙҙән бер үк төрлө хәрәкәттәрҙе ҡат-ҡат ҡабатлап күнектереүҙәрҙән ҡыҙыҡ тапмай башлай һәм оҫтаға шулай тип мөрәжәғәт итә: "Хөрмәтле уҡытыусы! Бер үк хәрәкәтте ниңә ҡат-ҡат ҡабатларға? Мин уларҙы үҙләштерҙем бит инде". Оҫта батшаның улына бер ни ҙә әйтмәй һәм бер нисә көндән уға хат тотторop, өйөнә ҡайтырға һәм атаһына тапшырырға ҡуша. Үсмер хатты ала ла ҡайтыу яғына юл ала. Ҡайтып барышлай юл ситендәге бер аҡланда өлкән генә ҡарттың әле генә үҙе өйрәнгән хәрби сәнғәт төрө күнекмәләрен яһап йөрөгәнен күреп ҡала. Үсмер бәлтерәгән ҡарттан көлөргә уйлап, мыҫҡыллап ҡысҡыра: "Эй, ҡарт, етәр һауаны туҡмау!" "Һин минән көлмә, улым, тәүҙә мине еңеп ҡара" - ҡарттың был һүҙҙәре үсмерҙең сәменә тейә һәм ул: "Үҙеңә үпкәлә, ҡарт алаша!" - ти ҙә алышҡа ташлана. Әммә ҡарт үҙенә ташланған үсмерҙе бер ҡулы менән еңел генә итеп ситкә алып осора. Үсмер урынынан тора ла тағы ҡартҡа ташлана, тағы тәкмәсләп барып төшә. Был хәл күп тапҡырҙар ҡабатлана һәм үсмер тамам хәлдән тая. Шунан ҡарт уға иплән кенә шулай ти: "Мин һине тәүге һуғыуҙан уҡ ҡуҙғалмаҫлыҡ итә ала инем. Тик һин йәшһең һәм ахмаҡһың. Үҙ юлың менән кит, әйҙә!" Үсмер ғәрлегенән тороп йүгерә. Өйгә ҡайтып еткәс, ҡулындағы хатты атаһына тоттора. Атаһы хатты асып ҡарай ҙа уны яңынан улына бирә: "Был хат миңә түгел, һиңә". Хатта былай тип яҙылған була:**

**"Күп тапҡырҙар күнектерелгән, камиллыҡҡа еткерелгән бер һуғыу күнектерелмәгән йөҙ һуғыуға ҡарағанда яҡшыраҡ..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23015

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 520